"Һәр милләт башҡа халыҡтар менән бергә донъяны яҡтыртыр өсөн үҙенең аң яҡтыртҡысындағы утты һаҡларға тейеш. Яҡтыртҡысы ватылған милләт донъя киңлектәрендәге законлы урынын юғалта. Яҡтыртҡысы булмағандар бәхетһеҙ, ләкин яҡтыртҡысы булып та уны юғалтҡан йәки онотҡандар меңдәрсә тапҡыр бәхетһеҙерәк".

Һинд халыҡ мәҡәлә.

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29 МАРТ - 4 АПРЕЛЬ (БУРАНАЙ - АЛАҒАРАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№13 (587)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Берәүҙәрҙе кәмһетеп...

үҙең юғары булып булмай



2

Ата - атай, әсә - әсәй, бала - ул һәм ҡыҙ...

Ошондай гаиләлә генә бәхет сәскә ата



3

Тарихи ваҡиға эҙе...

Темәскә, Йылайырға, Ишембайға алып барҙы



5-6

Үтә етди булырға ла ярамай -

донъя ауырлығы биленде һындырыуы бар



8-9

14 ТВ-программа

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Ошо көндәрҙә билдәләнеүсе Халыҡ-ара балалар китабы көнө айҡанлы ошондай һорау: "Бөгөнгө көндә балаларҙың китапҡа булған мөнәсәбәтен нисек баһалар инегеҙ?"

***Рәүеф БИКТАШЕВ, хаҡлы ялдағы уҡытыусы, Сибай ҡалаһы:*** Бөгөнгө көндә балаларҙың иғтибарын компьютер уйындары, интернет, кәрәҙле телефон кеүек әйберҙәр күберәк йәлеп итә, әлбиттә. Шулай ҙа, үҙемдең күҙәтеүҙәремдән сығып, шуны әйтә алам: китапханаларға кеше, шул иҫәптән балалар ҙа, күп йөрөй. Тимәк, китап уҡыйҙар. Бигерәк тә башланғыс класс уҡыусыларының китапҡа ҡыҙыҡһыныуы көслө. Әйтергә кәрәк, бәләкәй балалар өсөн сығарылған китаптар тышҡы һәм эске биҙәлеше яғынан сағыуыраҡ, зауыҡлыраҡ, йөкмәткеһе йәһәтенән дә, өлкәнерәк балалар өсөн тәғәйенләнгән китаптарҙан айырмалы рәүештә, күпкә яҡшыраҡ. Өлкән кластарҙа китап уҡыусы балаларҙың һаны йәйләп кәмей башлауында ошо сәбәптең дә роле барҙыр. Ә башҡорт телендә сыҡҡан китаптарға ҡарата һалҡынлыҡты мин башҡорт балаларының рус телле була барыуында күрәм. Уларҙың күбеһе бәләкәй саҡта ла, мәктәптә лә рус мөхитендә үҫергә, рус телендә аралашырға мәжбүр. Һәм улар, теләйме-юҡмы, рус әҙәбиәте менән ҡыҙыҡһына, рус телендә сыҡҡан китаптар уҡый башлай. Балаларҙың башҡорт телендә сыҡҡан китаптарға булған ҡыҙыҡһыныуы һүрелмәһен өсөн беҙгә бар тырышлыҡты һалырға кәрәк. Мәҫәлән, күптән түгел Сибайҙа шиғыр, хикәйә яҙыусы балаларҙың ижади конкурсы булып уҙҙы. Сарала ҡатнашыусы балаларҙың күп булыуы беҙгә өмөт өҫтәй. Тимәк, әҙәбиәттең киләсәге бар. Ҡәләм тирбәткән, үҙен ижадта күргән балалар бар икән, тимәк, китап яҙыусы ла, уларҙы уҡыусы ла юғалмаҫ. Бары тик уларға ваҡытында ярҙам итергә һәм бар ынтылыштарын ҡеүәтләп торорға кәрәк.

***Гөлфинә ЯМАЛЕТДИНОВА, Шишмә районы Келәш ауылы китапханасыһы:*** Беҙҙең ауылда китап яратыусы һәм күпләп әҙәбиәт уҡыусы кешеләр йәшәй. Бигерәк тә балаларҙың китапҡа битараф булмауы һөйөндөрә. Ҡайһы берәүҙәрҙең "Хәҙер балалар китап уҡымай", тигән һүҙҙәре менән бер ҙә килешмәйем. Мәҫәлән, беҙҙең китапханаға йөрөүселәрҙең күбеһен балалар тәшкил итә. Хатта дәрестәрҙән һуң өйҙәренә лә ҡайтып тормай, китап алырға йүгереп киләләр. Әгәр ҙә сирләп китһәм: "Апай, бер сәғәткә генә булһа ла барып, беҙгә китаптар бирееп ебәрегеҙ әле", - тигән үтенес менән өйгә үк килеп етәләр.

Уларҙың уҡыған китаптары, йәштәренә ҡарап, төрлө өлкәне үҙ эсенә ала. Бәләкәйерәк класс уҡыусылары тәбиғәт һәм хайуандар, шулай уҡ төрлө мажаралар һәм ҡурҡыныс ваҡиғалар ("ужастиктар") тураһындағы китаптарҙы, әкиәттәрҙе үҙ итһә, өлкәнерәк класта уҡыусылар иһә фантастик йүнәлештәге, техника тураһындағы, тарихты яҡтыртҡан һәм фәнни-популяр әҙәбиәтте уҡый. Шулай уҡ билдәле яҙыусыларҙың классикаға әйләнгән әҫәрҙәрен дә яратып уҡыйҙар. Мәҫәлән, Л.Толстой, Ф.Достоевский, А.Пушкин, башҡорт әҙәбиәтенән М.Кәрим, Р.Ғарипов, З.Биишева һәм башҡаларҙың китаптары һәр саҡ уҡыусылар ҡулында була. Балалар бигерәк тә ауылдаштары Мостай Кәримдең ижадын ярата. Уның "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ", "Беҙҙең өйҙөң йәме", "Өс таған" әҫәрҙәрен ҡат-ҡат алып уҡып сығалар.

Прозаны күберәк һораһалар ҙа, шиғыр һөйөүселәр ҙә етерлек. Китапханаға йөрөгән балаларҙың 10 проценты тирәһе шиғыр китаптарын даими ала. 10-сы синыфта уҡыусы бер бала, мәҫәлән, һәр ваҡыт Рәми Ғариповтың шиғырҙарын уҡый, ятлай, төрлө конкурстарҙа ҡатнаша. Үҙе әйтеүенсә, был авторҙың шиғырҙарын уҡыу һәм аңлау уға ауырыраҡ булһа ла, бер көн дә уҡымайынса тора алмай. Тимәк, битарафлыҡтан һәм моңһоҙлоҡтан ары торған, шиғри, асыҡ һәм саф күңелле балалар үҫеп килә.

Китапханабыҙ яңы ғына "мейестән сыҡҡан" китаптар менән йыш тулылана. Мәҫәлән, йыл башынан алып беҙгә дүрт тапҡыр яңы китаптар килтерелде. Улар араһында балалар өсөн тәғәйенләнгәндәре лә етерлек. Балаларҙы китап уҡыуға тағы ла нығыраҡ ылыҡтырыу өсөн китапханала төрлө темаға арналған түңәрәк өҫтәлдәр, викториналар уҙғарып торабыҙ. Уҡыусыларҙың был сараларҙы һәр саҡ көтөп алыуы һәм әүҙем ҡатнашыуҙары уларҙың китапҡа, әҙәбиәткә булған һөйөүенең ҙур икәнлеген асыҡ сағылдыра.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ШАҒИР ҺҮҘЕ




### БЫЛ ДОНЪЯЛАР ҠАЙҘА БАРА УЛ?

Урал урманында әжәл йөрөй,
Япраҡтарын ура ел-дауыл,
Йәне ҡанһыраған сал Уралдың
Аянысլы ауыр хәлен күреп,
Ҡысҡыраһым килә ҡарауыл!

Атайсалдың ҡот-ырыҫы кәмей,
Нигеҙенән ҡуба күп ауыл,
Тере килеш һалҡын гүргә ингән
Аҡ мәсетле ауылдарҙы йәлләп,
Ҡысҡыраһым килә ҡарауыл!

Тыуған ер бауырын һулҡылдатҡан
Ҡанһыҙ заман һалған яра ул,
Шул яраны йәһәт бәйләгеҙ тип,
Ватандаштарыма һөрән һалып,
Ҡысҡыраһым килә ҡарауыл!

Үҙ илемдә телем етем минең,
Был донъялар ҡайҙа бара ул?
Нисә йылдар буйы рәнйетелгән
Башҡортомдоң сәсән телен яҡлап,
Ҡысҡыраһым килә ҡарауыл!

Хәйер һорар сиккә етте илем,
Йөрәккәйем шуға яна ул,
Янған йөрәгемә сыҙай алмай,
Ҡытлыҡтарҙан, сираттарҙан биҙеп,
Ҡысҡыраһым килә ҡарауыл!

Беҙ Ватандың үгәй балаһымы -
Тиң хоҡуҡлы булыу ҡайҙа ул?
Ошо хаҡта ҡат-ҡат уйлай-уйлай,
Һәр милләткә рухи ирек даулап,
Ҡысҡыраһым килә ҡарауыл!

Һанға һуҡмай беҙҙе ҙур түрәләр,
Шәфҡәт ҡулы һуҙыу ҡайҙа ул?
Фенолдарҙан, диоксиндарҙан сарсап,
Мәскәү абзый үҙе ишетһен тип,
Ҡысҡыраһым килә ҡарауыл!

Мин намыҫҡа таянып баҫып торам,
Ҡоламаҫҡа һуңғы сара ул,
Хәлем бөтөп ҡапыл аумаҫ борон,
Күҙ йәшемде йөрәгемә йотоп,
Башҡайымды тағы ғорур тотоп,
Ил иманын иблестәрҙән ҡурсып,
Ҡысҡыраһым килә ҡарауыл!

Илдәштәрем, ғәзиз ҡәрҙәштәрем,
Әйтегеҙсе, зинһар, әйтегеҙсе,
Был донъялар ҡайҙа бара ул?
Был донъялар ҡайҙа бара ул?!

✓ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, танышта-рығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.



ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● 31 мартҡа тиклем тәүге ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән, йәғни 384 һум 36 тингә, 50665 индексы "Киске Өфө"гә 2014 йылдың икенсе яртыһы өсөн яҙылып өлгөрә алаһығыҙ әле. Апрелдән хаҡтар бер аҙ үҙгәрәсәк, тип көтөлә.

● Мартта 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән **2 уҡыусыбыҙ - "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре", 2 уҡыусыбыҙ - "История башкирского народа", 10 уҡыусыбыҙ башҡортса "Дини календарь", 5 уҡыусыбыҙ Мәрйәм Бураҡаеваның "Көҙгө ысыҡ" китаптарын алып ҡыуаныр.** Бындай бүләкләүҙәр апрелдә яҙылғандар өсөн дә буласаҡ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **330 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндә ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ унайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **246 һум.**

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **246 һум.**

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: "Киске Өфө" гәзитенә республиканың һәр районында, ҡалаһында, ауылында яҙылып була.

● Беҙҙең сайт: ***www.kiskeufa.ru***. Беҙҙең электрон почта: ***info@kiskeufa.ru***. Беҙҙең блог: ***blog.kiskeufa.ru***.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ошо көндәрҙә билдәләнеүсе Халыҡ-ара балалар китабы көнө айҡанлы ошондай һорау: "Бөгөнгө көндә балаларҙың китапҡа булған мөнәсәбәтен нисек баһалар инегеҙ?"

**(Башы 1-се биттә).**

***Әлиә СОЛТАНОВА, ике бала әсәһе:*** Минең улыма - 16, ә ҡыҙыма 8 йәш. Икеһе лә әҙәбиәткә битараф түгел. Ләкин уларҙың уҡыу алымдары төрлөсә. Улымдың ҡулында күптән инде ҡағыҙға яҙылған китап күргәнем юҡ, сөнки ул китапты "тыңлай". Шуға күрә әҙәби әҫәрҙәр уның бүлмәһендә китап түгел, ә аудиояҙма рәүешендә һаҡлана. Уның фекеренсә, был ысул бүлмәлә бик күп урынды бушата, туҙан йыймай һәм гелән үҙең менән кәрәкле китапты алып йөрөргә мөмкинлек бирә. Ләкин мин был ысулды аңлап та етмәйем, ҡабул да итә алмайым. Телләгән ерендә туҡтап, уҡылғандарға йәйлап һығымталар эшләй-эшләй, бит аҫҡан һайын ләззәт алып, рәхәтләнеп ҡулыңа алып уҡымағас, китап уҡыу булаmы ни ул? Шулай уҡ күпселек башҡорт авторҙарының китаптары тик яҙма хәлдә, тимәк, улым рус телендә генә уҡый булып сыға. Был аяныслы хәл. Шуға күрә, башҡорт авторҙарының да китаптары аудиояҙма булараҡ сығарылһа, яҡшы булыр ине.

Ә ҡыҙым иһә, киреһенсә, аҙна һайын тигәндәй яңы китап алдырта. Әле ул башлыса башҡорт халыҡ әкиәттәренә һәм төрлө энциклопедияларға өҫтөнлөк бирә. Ләкин башҡорт телендә сыҡҡан әҫәрҙәрҙең әҙ булыуы бер аҙ күңелде ҡыра. Китап магазиндарында башҡорт телле әҙәбиәт өсөн бәләкәй генә бер мөйөш бүленгән, уныһында ла балалар өсөн әҙәбиәт табыуы ауыр. Шуға ла балаларҙың сағыу һүрәте менән әллә ҡайҙан үҙенә иғтибарҙы тартып, көштә тулып торған рус телле китаптарға үрелеүенә аптырарға түгел. Ҙур ҡалала киҫкен торған был мәсьәлә ауылдарҙа нисек хәл ителә икән?

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

ШУЛ ДА БУЛДЫМЫ ҒӘҘӘТ!

# БЕРӘҮҘӘРҘЕ КӘМҺЕТЕП...

## үҙең юғары булып булмай



**19 мартта Татарстан Республикаһының Әлмәт драма театры Башҡортостанға сираттағы гастролдәренә килгәйне. Беренсе көндө тамашасыларға драматург Тажи Ғиззәттең "Ҡыйыу ҡыҙҙар" комедияһы буйынса режиссер Илдар Хәйруллин сәхнәләштергән спектакль тәҡдим ителде. Әммә тамашала башҡорт халҡына ҡарата мыҫҡыллы һүҙҙәр яңғырауы йәмәғәтселек араһында ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙырҙы. Һөҙөмтәлә Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы театрҙың гастролен ваҡытынан алда туҡтатырға мәжбүр булды.**

Интернет селтәрендәге фекер алышыуҙар барышында автор материалының төп нөсхәһендә сәхнәнән яңғыраған һүҙҙәрҙең бөтөнләй булмауы асыҡлана, тимәк, уны кемдәндер үҙенән өҫтәүе бик ихтимал. Ошо күңелһеҙ хәлгә бәйле Татарстан мәҙәниәт министрының беренсе урынбаҫары Ирада Әйүпова: "Милли тойғоһо кәмһетелгән тамашасы алдында ғәфү үтенеүҙе үҙебеҙҙең мөҡәддәс бурысыбыҙ тип иҫәпләйбеҙ. Ихлас күңелдән әйтәм: был тамаша менән бер кемде лә рәнйетергә теләмәнек. Беҙгә ҡарата булған тәнҡит һүҙҙәрен ҡабул итәбеҙ һәм күңелһеҙ хәлваҡиға тыуҙырыуға килтергән сәбәптәрҙе ентекле тикшерәсәкбеҙ", - тип белдерҙе. Был йәһәттән спектаклдең видеояҙмаһы анализланасаҡ.

Татарстандың мәҙәни йәмәғәтселегә вәкилдәре быны, артистың ике милләт араһындағы иң ныҡ ҡылға ҡағылған үкенесле хатаһы, тип иҫәпләй. Бына уларҙың бер нисәүһенең фекерҙәре:

**Римзил Вәлиев, йәмәғәт эшмәкәре һәм публицист:** Был, әлбиттә, ҡыҙыҡһыныусы кешеләр ике туғандаш халыҡ араһында дошманлыҡ тыуҙырыу өсөн файҙалана алырлыҡ үкенесле хәл. Шуға күрә мин беҙгә ғәфү үтенергә һәм был теманы артыҡ ҡуйыртмаҫҡа кәрәк, тип уйлайым.

**Рауил Сабыр, драматург:** Был ваҡиға һүҙ менән үлтереп, һүҙ менән терелтеп булғанын тағы бер тапҡыр раҫланы. Режиссер тарафынан да, актер тарафынан да автор тексына үҙгәрештәр индергәндә бик һаҡ булырға кәрәк. Мин Әлмәт театры спектаклен ҡараманым, пьесаны ла күптән уҡығайным, әммә, иҫләүемсә, унда һүҙ барлыҡ шәкерттәр тураһында бара. Әгәр Әлмәт театры, ысынлап та, татар шәкерттәрен аҡтан-аҡ итеп күрһәтеп, башҡорт шәкертен кәмһетә икән, был, минеңсә, провокация. Шуныһы аңлашылмай, Ҡырым һәм Украиналағы ваҡиғалар барышы халыҡтың милли тойғоларын ныҡ киҫкенләштергәндә, был тойғоларҙа уйнау нимәгә кәрәк?

**Роберт Миңнуллин, Татарстандың Дәүләт Советы депутаты, Татарстандың халыҡ шағиры:** Был, әлбиттә, барыбыҙ өсөн дә хурлыҡ! Әшәкелек. Тотош коллектив, режиссер, актерҙар ниндәй хәлгә барып еткән. Уларҙың фекерләүе шулай. Башҡорттарҙың был күренеште шулай һағайып ҡабул итеүе, минеңсә, дөрөҫ. Был, ысынлап та, халыҡты кәмһетеү. Әгәр беҙгә Башҡортостандан башҡорттар килеп татарҙар хаҡында шулай тип сәхнәнән һөйләһә, беҙ нимә эшләр инек?! Элек бындай хәлдең булғанын иҫләмәйем. Мәҙәниәт министрлығы һығымталар яһарға тейеш.

**Әйткәндәй, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты был хәл айҡанлы Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовҡа мөрәжәғәт итте. "Һуңғы ваҡытта,- тиелә мөрәжәғәттә, - беҙҙең республикаға түбән профессиональ кимәлдәге һәм шикле репутациялы үҙешмәкәр коллективтарҙың концерт һәм спектаклдәре йышайҙы. Беҙ Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығы республикала юғары профессиональ, мәғрифәт һәм мәҙәни сәйәсәтте тормошҡа ашырырға һәм республика территорияһындағы гастролдәр эшмәкәрлеген дә үҙ контроленә алырға тейеш, тип иҫәпләйбеҙ..."**

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин Башҡортостан республикаһы халҡын Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының 95 йыллығы менән ҡотлап, телеграмма ебәрҙе.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов республика халҡын мөһим дата - Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының 95 йыллығы менән ҡотланы.

✓БР Мәғариф министрлығы уҙған йылға йомғаҡ яһаны. Коллегияны Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов асты. Сығышы һуңында Рөстәм Хәмитов иң яҡшы мәғариф хеҙмәткәрҙәренә дәүләт наградаларын тапшырҙы.

✓Өфөлә Рәсәй Федерацияһы Волга буйы федераль округы субъекттарының закондар сығарыусы дәүләт власы органдары ассоциацияһының 38-се ултырышы булып үтте. Ассоциация ултырышында БР Дәүләт Йыйылышы Рәйесе Константин Толкачев етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙың законлы хоҡуҡтарын һәм мәнфәғәттәрен яҡлау мәсьәләләре буйынса доклад менән сығыш яһаны. Башҡортостанда етемлек менән бәйле мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә байтаҡ тәжрибә тупланған. Һуңғы йылдарҙа республикала етем балалар һәм балалар йорттары һандарының ярайһы уҡ кәмеүе күҙәтелә. 2008 йылдан алып Башҡортостанда ошондай алты учреждение ябылды.

✓БР Профсоюздар федерацияһы балалар сәләмәтләндереү лагерҙарына путевкалар йәрминкәһе уҙғара. Был сара күп йылдар дауамында Өфөлә йәй миҙгеле алдынан ойоштоһола һәм ата-әсәләргә балалар лагерҙарында ял итеү шарттары менән танышыу, кәрәк булғанда путевка алыуға ойошмалар менән килешеү төҙөү мөмкинлеге бирә. Йәрминкә БР Профсоюздар йортонда 4 апрелдә 11 сәғәттә башланасаҡ.

✓Ғафури районының Сәйетбаба ауылында милли көрәш буйынса "Табын батыры-2014" асыҡ зона турниры уҙҙы. Ярыштар Башҡортостандан Дәүләт Думаһы депутаты Марсель Йосопов булышлығында муниципалитет хакимиәте һәм "Табын" район гәзите редакцияһы тарафынан ойошторолдо. Турнирҙа Ғафури, Ишембай райондарынан һәм Стәрлетамаҡ ҡалаларынан спортсылар ҡатнашты. Осрашыу йомғаҡтары буйынса абсолют еңеүсе Стәрлетамаҡтан Айгиз Зәйнетдинов булды.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

**Быйыл Беренсе донъя һуғышы башланыуға - 100 йыл. Балкан ярымутрауында австрий эрцгерцогы Франц Фердинандты серб студенты Гаврила Принцип атып үлтереүҙән генә ҡубып китә был гәрәсәт. Был һуғышта ҡатнашҡан башлыса Европа дәүләттәре үҙҙәренең байтаҡ ир-егеттәрен юғалта. Рәсәй империяһының юғалтыуҙары 1,67 млн кеше тәшкил итә - 175 миллионлыҡ дәүләт өсөн ғаилә ҡороп, күпләп бала үҫтерә торған ир-егеттәрҙең уртаса 30-40 процентҡа кәмеүе, шунан һуң уларҙың граждандар һуғышында тағы 700 меңгә кәмеүе беҙҙең ил өсөн әҙемтәһеҙ ҡалмай.**

# АТА - АТАЙ, ӘСӘ - ӘСӘЙ, БАЛА - УЛ ҺӘМ ҠЫҘ...

## Ошондай ғаиләлә генә бәхет сәскә ата

Иосиф Сталин башлаған индустрияләштырыу өсөн ир-егеттәр етешмәүе арҡаһында йәш совет дәүләте күпләп ҡатын-ҡыҙҙарҙы ошо ауыр эшкә йәлеп итә башлай. Патриархаль Рәсәй өсөн ҡатын-ҡыҙҙарҙың өйҙән тыш эшләүен коммунистар партияһы идеологик яҡтан нигеҙләп тә ҡуя - йәнәһе, яңы йәмғиәттә ҡатын-ҡыҙ яңы үрҙәр яулай, көслә зат менән бер кимәлгә күтәрелә. Ҡорос иретеүсе Макар Мазай, шахтер Алексей Стахановтар менән бер рәттән, трактор бригадаһы ойоштороған Паша Ангелина заман геройы булып китә. Ұға эйәреп, күп ҡатын-ҡыҙҙар ҡулдарына көйлә, кирбес, бысҡы-балта, лом алалар. Әгәр 1928-1929 йылдарҙа илдә 2,5 млн. эшләүсе ҡатын-ҡыҙ иҫәпләнһә, 1931 йылда иһә улар 3,6 миллионғаса етә.

Һуғыштан һуң иҡтисадты үҫтереү өсөн совет дәүләтенә башлыса гүзәл затҡа таянырға тура килә. Балалар үҫтергән хужабикә, ғаиләне ҡараған әсә булып тәрбиәләнгән ҡатын-ҡыҙ өсөн үткән быуат ҙур һынылыш осоро була. Ҡыҫҡа ғына декрет ялы уларҙың балаларына тейешле тәрбиә биреүҙе балалар баҡсаларына, мәктәпкә, төрлө лагерҙарға, түңәрәктәргә йөкмәтеүгә сәбәпсе булды. Был учреждениелар йыш ҡына "балаларҙан ҡотолоп тороу" урыны булып хеҙмәт итте. Мәҫәлән, китапханала эшләгән әсәйем мине, китап шкафында тота торғайным, тип, көлөп һөйләй торғайны. Нишләйһең инде, декрет ялы ике ай ғына булғас. Ярай, беҙҙең заманда олатайҙар-өләсәйҙәр булды. Хәҙер ҡалаларға күсеп китеп йәшәгән быуындың балалары уларҙың тәрбиәһенән дә мәхрүм үҫә. Кем белә, йүнләп әсә тәрбиәһе күрмәй үҫкән балалар ошо сәбәпле лә үҙенә ҡул һалырға ынтылалар: суицид тап 20-се быуаттың икенсе яртыһында киң таралыш алды бит.

Советтар Союзында "Кем эшләмәй - шул ашамай" тигән принцип (һүҙ юҡ, дөрөҫ ҡанун) арҡаһында "эшләмәй" өйҙә ятҡан кеше, ҡатын-ҡыҙ булһа ла, әрәмтамаҡ тип һаналды. Ошоноң арҡаһында 80-се йылдарҙың аҙағында эшкә яраҡлы ҡатын-ҡыҙҙарҙың тик 8 проценты ғына хужабикә булды, ә ҡалған 92 проценты йә эшләй, йә уҡый ине. Был донъялағы иң юғары, мәҫәлән, Көнбайыш дәүләттәренән 30-40 процентҡа юғарыраҡ (20-55 йәштәгеләр араһында) күрһәткес булды. Ҡатын-ҡыҙҙар бөтә эшләүселәрҙең 51 процентын тәшкил итте. Юғары белем кимәле буйынса ла улар ир-аттан өҫтөнөрәк булып сыҡты. Юғары белемлеләренең күпселеге (80 процент) иҡтисадтың алты тармағын яуланы: мәғариф (29,6 процент), сәнәғәт (19,7), фән (12,4), һаулыҡ һаҡлау (9,0), идара (6,6) һәм төҙөлөш (5,6 процент). Бала тапҡан өсөн компенсация рәүешендә дәүләт уларға ир-аттан биш йылға алдараҡ пенсияға сығыу хоҡуғы бирҙе. Әммә был "бүләк" уларға әллә ни ҙур өҫтөнлөк бирмәне. Ир-аттар 59-ға тиклем йәшәһә, ҡатын-ҡыҙҙар 13 йыл яңғыҙы ҡалып йәшәргә тейеш булып сыҡты. Тимәк, ир-аттың пенсия фондына ғүмер буйы түләгән аҡсаһын ҡатын-ҡыҙ "ашап" ята. Ә яңы пенсия реформаһы уларҙы киләсәктә ошо бүләктән дә мәхрүм итәсәк...

Иҡтисадты үҫтереүҙең төп юлы булған яңы техника һәм технологиялар ҡулланыу урынына дәүләт ҡатын-ҡыҙҙарҙы эшкә йәлеп итеүҙе өҫтөн күрҙе. Быйың өсөн Союз кимәлендә Валентиналар: Терешкова, Ваганова, Голубева, Башҡортостан кимәлендә - Банат Батырова, Эльвира Гулиналар геройлаштырылды. Ҡатын-ҡыҙҙың йәмғиәттәге ролен күтәреү ғаиләнең "дайсаһы" иҫәбенә атҡарылды. Совет әҙәбиәтендә, кинематографында, сәнғәтендә эшләгән ҡатын-ҡыҙ күтәрелде. Ҡатын-ҡыҙҙың ролен дәүләт, фән эшмәкәре кимәленә күтәрергә тырышыу тейешле һөҙөмтәләр бирмәне һәм бирмәйәсәк



Тәнзилә Ғәйфуллина һүрәте.

тә, сөнки тәбиғәттән ҡатын-ҡыҙ яңы нәмә булдырыу өсөн яратылмаған. Уның төп бурысы - булдырылған нәмәне һаҡлап ҡалыу (Илебеҙҙең күренекле ҡатын-ҡыҙҙары араһынан донъя кимәленә күтәрелгән математик Софья Ковалевскаяны ғына атап булалыр. Ҡатын-ҡыҙҙар үпкәләр, бәлки, әммә ул математик барыбер ир математиктар кимәленә күтәрелә, ә Валентина Терешкова иң түбән әҙерлекле ир-егет космонавтыбыҙҙан уҙҙыра алманы. Ҡатын-ҡыҙға ғына хас тармаҡтарҙа ла беренсе ролде ир-ат алып тора: мода булһынмы, кулинария булһынмы, барыбер ҡатын-ҡыҙ көслө заттан өҫтөн булған иҡтисад тармағы юҡтыр. Бөгөнгө сәйәсмәндәр араһындағы ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла башлыса антураж урынына тоталар шикелле).

Ә эшләгән ҡатын-ҡыҙ өсөн бала табыу әкренләп ҡамасауға әйләнә башланы. Карьераны ғаиләнән өҫтөн күргән гүзәл заттар дәүләт тарафынан да шым ғына хупланды. Улар араһында "исем өсөн генә" 1-2 бала табыу ғәҙәти күренешкә әйләнде. Урамда, бигерәк тә ҡала ерлегендә, күпләп бала эйәрткән әсәләргә кире ҡараш барлыҡҡа килде. Уларҙы төрлөсә оялтырға, хурларға маташҡан кешеләр күбәйҙе. Мәҫәлән, Ростовта, Мәскәүҙә уҡыған саҡта минең биш балалы ғаиләнән икәнемде ишеткән тиҫтерҙәремдең күптәре көмендә мыҫҡыллы йылмая торғайны. Сиған, сусҡа, кролик менән сағыштырып көлгәндәре лә етерлек булды. Үҙҙәренең күп балалы ғаиләнән сыҡҡаны өсөн оялғандар ҙа осраны миңә. Ул ғына ла түгел, әсә, хужабикә булыу етешһеҙлек һымаҡ ҡабул ителә башланы. "Хужабикә" һүҙе кәмһетеүгә тиң ине. Бала табыуҙы туранан-тура кәрәкмәгән шөғөл тип тә иҫәпләгән ҡатын-ҡыҙҙар барлыҡҡа килде. Бер-ике бала менән сикләнгән ғаиләләрҙә үҫкән ҡыҙ бала әсә, ҡатын ролендә әҙер булмай сыҡты. Ысынлап та, уның бер бала ғына тәрбиәләгән әсәһенең бала бағыу тәжрибәһе юҡ кимәлендә, ә ҡыҙыныҡы - нулгә тиң. Бер генә мәҡәлә яҙғанды - журналист, бер генә операция яһаған хирургты оҫта табип тип әйтеп булмаған кеүек, бер-ике генә бала менән сикләнгән ҡатын-ҡыҙҙы тәүҙә һәр яҡтан килгән әсәй, һуңынан өләсәй тип атап булмайҙыр. Тик ошоноң менән генә, бер яҡтан, буйҙаҡ егеттәрҙең, икенсе яҡтан, ҡарт ҡыҙҙарҙың баҫып алыуын аңлатып булалыр. Егеттәр ҡыҙҙар араһында буласаҡ балаларына яҡшы әсәй, үҙенә ҡатын булырлыҡты таба алмағас, өйләнергә ҡыймай йөрөй бирә. Хәҙерге ҡыҙҙар араһында хужабикә булырлыҡ кәләштәр бик һирәк. Ә ҡарт ҡыҙҙарға килгәндә, улар әсәй, ҡатын булырға ҡурҡа.

"Киске Өфө"нөң 11-се һанында Баныу Ҡаһарманованың "Балаларығыҙ һуҡыр, һаңғырау, аҡылһыҙ түгел" тигән мәҡәләһе баҫылды. Мәҡәләлә килтерелгән ике миҫал быға раҫ булып тора: бала табып та әсә була алмаған ҡатын-ҡыҙ бихисап. Үҙ балаларын әрләп, һүгеп, күрә алмаған, яратмаған, хатта үҙ балаһын үлтергән ҡатынды әсә тип әйтергә бер нисек тә тел әйләнмәй шул. Үҙҙәре тәрбиәләү урынына балаларҙы төрлө лагерҙарға ебәреүҙе, компьютер, кеҫә телефоны һ.б. алып, йолом биреүҙе хуп күргәндәребеҙ ҙә етерлек арабыҙҙа. Ундайҙарға бала, ғаилә кәрәкмәй булып сыға. Бында ла оптималләштереү күренеше бара түгелме? Үҙен генә уйлаған ата-әсә бер быуындан һуң шәжәрә ағасының ҡороп йығылырын күҙ алдына ла килтермәй шикелле. Европа дәүләттәренә күҙ һалыу ҙа етә: ошо ҡараш арҡаһында француз, инглиз, немецтар дәүләттәрен килмешәктәр баҫып алғанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Толерантлыҡ, сәйәси корректлыҡ, мультимәҙәнилек талаптары менән генә ҡотола алмаясаҡ хәҙер улар. Әйтергә кәрәк, социологик тикшеренеүҙәр буйынса, беҙҙә ир-аттарҙың 20,1 проценты ҡатын-ҡыҙҙы ғаиләгә ҡайтарырға кәрәк, тип иҫәпләһә, ҡатын-ҡыҙҙар араһында был күрһәткес - аптырарһың - 16 процент. Ә шулай ҙа ҡатын-ҡыҙҙы ғаиләгә ҡайтарып, ир-атҡа эш хаҡын тейешенсә арттырыу яҡшыраҡ түгелме, йәмәғәт?

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов республика Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Хәйҙәр Вәлиевҡа юғары награда - Салауат Юлаев орденын тапшырҙы. Наградлау тантанаһы республика Үҙәк һайлау комиссияһы башлығының юбилей көнөндә үтте.

✔ БР Дәүләт Йыйылышы депутаттары Белорет районының Тимер юл ауылындағы хәлдә асыҡлау өсөн парламент тикшереүе уҙғарҙы. Башҡарған эш йомғаҡтары буйынса закон сығарыусылар республиканың Экология кодексына төҙәтмәләр индерергә тәҡдим итте. Граждандарҙың нормаларҙы һәм тәртипте боҙоп, ағас ташыу, ағас эшкәртеү ҡалдыҡтарының рөхсәтһеҙ сүплеген ойоштороу тураһындағы ялыуҙары ауылдағы хәлде парламент кимәлендә өйрәнеү өсөн сәбәп булып торҙо..

✔ Башҡортостан Республикаһынан Ҡырым ярымутрауы рәсәйләләренә гуманитар йөк оҙатылды. БР Хөкүмәтенең резерв фонды иҫәбенә аҙыҡ-түлек һәм медикаменттар менән автокаруан йыйылды. Уның составына дүрт ҙур йөк машинаһы инде. БР Ауыл хужалығы министрлығы "Башагропродукт" дәүләт унитар предприятиеһы менән берлектә 36 тонна аҙыҡ-түлек әҙерләгәндәр, унда Ҡырым хакимиәте һораған туҡланыу продукттары ингән, улар: он, ярмалар, макарондар, ит консервалары, ҡуйыртылған һәм киптерелгән һөт, көнбағыш майы, бал. Шулай уҡ Ҡырымға оҙатылған йөк составына медицина тәғәйенләнешендәге препараттар, 70-ләгән төр дарыуҙар инде.

✔ Ғинуар йомғаҡтары буйынса нефть продукттары етештереүҙә уртаса эш хаҡы Башҡортостанда 53 517,7 һум тәшкил итте. Нефть эшкәртеүҙән һуң эш хаҡы кимәле буйынса байтаҡ артҡа ҡалыш менән финанс эшмәкәрлеге килә: 41 288,4 һум. 2013 йылдың ғинуары менән сағыштырмаса, нефть эшкәртеүселәрҙең уртаса эш хаҡы бер аҙға (2,2 процентҡа) кәмегән, ә финанс ойошмалары хеҙмәткәрҙәренең - үҫкән (2,1 процентҡа). Бөтә иҡтисади эшмәкәрлек төрҙәре буйынса уртаса эш хаҡы ғинуарҙа 21 788 һум тәшкил итте.

**"Башинформ"дан.**

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# ҒҮМЕРҘӘР ӨҘӨЛӘ... юлдарҙа

**20 март көндө Өфө-Инйәр-Белорет трассаһының 46-сы саҡрымында ҙур юл фажиғәһе булды. "Фольксваген" микроавтобусы "Мерседес-Бенц" йөк автомобиле менән бәрелеште. Фажиғәлә 7 кешенең ғүмере өҙөлдө. Улар Өфөлә һәм Баймаҡта йәшәүселәр. Микроавтобус водителе тән йәрәхәттәре менән дауаханаға оҙатылды, уға ҡарата енәйәт эше ҡуҙғатылды.**

Юл инспекцияһы тикшереүҙәре һәм шаһиттар һүҙҙәре буйынса, һауа торошо яҡшы, юл асыҡ була. Ниндәй сәбәптәр микроавтобус водителен ҡаршы яҡҡа сығырға этәргәнен тикшереү барышында асыҡлаясаҡтар. Һәр хәлдә, был юл ҡазаһы пассажирҙар ташыу өлкәһендә булған етди мәсьәләгә иғтибар иттерҙе. Һуңғы йылдарҙа бер ҡайҙа ла теркәлмәгән, лицензия алмаған шәхси таксистар күбәйҙе. Бөгөнгө көндә дөйөм диспетчер пункттары, икенселәре социаль селтәрҙәр аша табып, пассажирҙар ташыу менән шөғөлләнә. Әлбиттә, уларҙа йөрөгән пассажирҙар бер нимәнән дә страховкаланмай. Шул уҡ ваҡытта хаҡтарҙың ҡиммәт булмауы, такси салонындағы уңайлыҡ менән пассажирҙар йөрөтөүҙең ошо төрө тиҙ танылыу тапты. Кешеләрҙә водителдәрҙең профессиональ кимәле лә, физик, мораль мөмкинлектәре лә борсомай.

Юл фажиғәһендә һәләк булғандарҙың ҡайғыһын уртаҡлашҡандан һуң, республика Президенты Рөстәм Хәмитов легаль булмаған таксистар менән көрәшәсәктәрен белдерҙе. Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай ултырышындағы сығышында ул: "Пассажирҙар ташыуҙы теркәлеү үтмәгән, лицензияһы булмаған, "һулаҡай" водитель башҡарған. Һис шикһеҙ, беҙ пассажирҙарҙы ташыу менән бәйле өлкәләге хәлдәр буйынса ентекләберәк шөғөлләнәсәкбеҙ", - тип билдәләне. Тимәк, киләсәктә ошо өлкәлә үҙгәрештәр, сикләүҙәр булыуы көтөлә.

Ләкин иғтибарҙы легаль булмаған таксистарға ғына йүнәлтеп, башҡа проблемалар хаҡында ла оноторға ярамай. Юл фажиғәләренең иң ҙур өлөшө ҡаршы яҡ юлға сығыу менән бәйле. Көнбайыш илдәрендә юлдарға ике яҡты айырып тороусы сикләүҙәр ҡуйып, был мәсьәләне күптән хәл иткәндәр. Юлдар сифаты ла яҡшыраҡ. Был - беренсенән. Икенсенән, легаль булмаған рәүештә пассажирҙар ташыу, ошо хеҙмәтләндереү төрөнөң халыҡ араһында ҙур һорау менән файҙаланылыуы ла пассажирҙар ташыу менән шөғөлләнеүсе дәүләт структураларының етешһеҙлеге эҙемтәһе. "Башавтотранс" ойошмаһын тамырынан яңыртып, пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереүҙе юғары кимәлгә күтәреп, яңы автобустар һатып алып, бәлки, ҙур автобустарҙы бәләкәй, уңайлы, тиҙ йөрөгән микроавтобустарға алыштырып, мәсьәләне хәл итергә булыр ине. Йә булмаһа, конкурент фирмаларҙы ошо баҙарға (ҡала араһында пассажирҙар ташыу) легаль рәүештә индерергә кәрәк. Европа илдәрендә, мәсәлән, пассажирҙар йөрөтөү менән бер ойошма ғына түгел, ә тиҫтәләгән фирма шөғөлләнә. Клиенттарҙы юғалтмаҫ өсөн һәр фирма тырышып эшләй. Хеҙмәтләндереү юғары кимәлдә. Бөгөнгө көндә беҙ республика автовокзалдарында "Башавтотранс" автобустарын ғына күрәбеҙ. Ә "дәүләттеке булмағандар" төрлө мөйөштәрҙә пассажирҙар йыя. Ғөмүмән, сикләүҙәр менән генә нимәләр өлгәшеп булмаясаҡ, мәсьәләне хәл итеү юлдарын эҙләргә кәрәк. Бәлки, ул саҡта үткән аҙналағы кеүек фажиғәләр ҙә булмаҫ ине.

**Мораҙым ИСКӘНДӘРОВ.**

БАШ ЙОРТТА

# РЕВОЛЮЦИОН ТҮГЕЛ...

## эволюцион үҫеш кәрәк

**Йәмәғәт фекерен асыҡлау буйынса уҙғарылған социологик тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, баш ҡала респонденттарының дүрттән өс өлөшө (73 процент) үҙ ғаиләһенең йәшәү кимәле менән ҡәнәғәт. Яуап биреүселәрҙең 15 проценты бөтөнләй ҡәнәғәт түгел. Матди хәлдәрен сағыштырмаса яҡшы тип 41 процент белдерһә, яҡшы баһаһын 18 процент ҡуйған. Сағыштырмаса насар тип - 25 процент, ә 7 процент насар тип иҫәпләгән.**

Һуңғы йылда 41 процент өфөлө ғаилә килеменең ниндәйҙер кимәлдә үҫеүен билдәләгән, ә 14 процент, киреһенсә, килеменең кәмеүен тойған. 45 процент яуап биреүсе бер ниндәй үҙгәреш тә тоймаған. Шулай ҙа, юҡҡа ғына кешене өмөт йәшәтә, тимәйҙәрҙер инде. Респонденттарҙың өстән бер өлөшө ғаиләһенең матди хәле яҡшырыуына өмөтләнһә, 9 процент өфөлө киләсәккә пессимистик ҡарашта. Был мәғлүмәттәр Өфө хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика идаралығы начальнигы Асҡар Фазлыев үткәргән матбуғат конференцияһында килтерелде.

Бөгөн кредитһыҙ йәшәүселәр бик һирәктәр, моғайын. Респонденттарҙың тап яртыһы ниндәй ҙә булһа кредит түләй. Бик йыш был ҡулланыу кредиты (көнкүреш техникаһы, ремонт, белем алыу, дауаланыу һ.б.) - 33 процент, автокредит - 11 процент, ипотека - 6,5 процент. Уртаса эш хаҡы яуап биреүселәрҙең 45 процентын ҡәнәғәтләндерә, 55 процент, киреһенсә, ҡәнәғәтһеҙлек белдерә. 72 процент әле эшләп йөрөгән эш урынында хәл-торошто тотороҡлоғон һәм яҡын арала эштән ебәрелеү йәки ҡыҫҡартылыу янамауын билдәләй. Өфөләләр үҙ ҡалаһын ярата. Быны уларҙың яуабы ла раҫлай: 63 процент баш ҡаланы Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән туристарҙы йәлеп итеү өсөн ылыҡтырырлыҡ тип баһалаһа, 87 процент артабан да туристар ағымын көсләрәк итеү йәһәтенән төрлө саралар уҙғарырға кәрәклекте билдәләй.

Һуңғы йылдарҙа ҡала ситендәге торлаҡҡа ихтыяж тоторокло үҫешеп, биш йыл эсендә ул 47 проценттан 56,5 процентҡаса күтәрелгән. Ҡала ситендә йорт һатып алырға әҙер 56,5 процент торлаҡ сифатында таунхаусты ҡуҙаллай, ә 37,7 проценты бындай торлаҡ тибын үҙе өсөн яраҡһыҙ тип иҫәпләй.

Яуап биреүселәрҙең сирегенең тиерлек Өфөлә торлаҡ алырға теләге бар. Уларҙың 50 процентын эконом-класс торлағы алыу мөмкинлеге ҡыҙыҡһындыра. Потенциаль һатып алыусыларҙың яртыһы тиерлек фатирҙы беренсел торлаҡ баҙарында йәки төҙөлөш стадияһында (тейешенсә, 33 һәм 13 процент) һатып алыуҙы хуп күрә. Өфө халҡы фекеренсә, ҡала Дим һәм Ағиҙел арьяғы, Затон-Дим (31 процент һәм 30 процент) яғына үҫешергә тейеш. Был йүнәлештәрҙә яңы биҫтәләр төҙөлөшө перспективалы тип иҫәпләнә. Респонденттарҙың 22 проценты, ҡала Ҡариҙел арьяғы (Нагаево, Дорогино) яғына үҫешергә тейеш, тип һанай.

Шулай уҡ социологик тикшеренеүҙәр исемлегендә донъяла барған ваҡиғалар фонында баш ҡалала сағылыш табыу ихтимал булған сараларҙа ҡатнашыу тураһындағы һорау ҙа булған. Яуап биреүселәрҙең 50 проценты революцион түгел, ә эволюцион үҫеш яҡлы икәнлеген һәм бер ниндәй ҡаршылыҡ акцияларында ҡатнашмаясаҡтарын белдергән.

КӨНҮҘӘК МӘСЬӘЛӘ

# ИХ, ЮЛДАР...



**Йыл һайын көндәр йылыныу менән баш ҡала, республика халҡы ҡала урамдарында, федераль трассаларҙа соҡорҙар, ярыҡтар күбәйеүен күҙәтә. Былтыр Өфө - Аэропорт йүнәлешендә юл һалыусыларҙың сифатһыҙ материалдар ҡулланып эш башҡарыуы арҡаһында килеп тыуған гауғанан һуң ойошторолған "БР Өфө ҡала округын төҙөкләндереү буйынса заказсы һәм техник күҙәтеү хеҙмәте" муниципаль бюджет учреждениеһының Юл төҙөлөшө лабораторияһына ошо етешһеҙлектәр булмауын контролдә тотоу маҡсаты ҡуйылған.**

Лаборатория юл япмаһының сифатын тикшерә, экспертизалар, һынауҙар үткәрә, юл һалыу менән шөғөлләнгән подряд ойошмаларҙың эшен контролдә тота, шулай уҡ уларҙың стандарттарға яуап бирмәгән эштәрҙе ҡабул итмәү вәкәләте лә бар. Лаборатория белгестәре билдәләүенсә, юлдарҙың тиҙ эшлектән сығыуының, ярыҡтар барлыҡҡа килеүе сәбәптәренең береһе - уларҙың нигеҙе бушаҡ булыуы. Бәҡтиһәң, элек юл төҙөгәндә асфальт-бетон нигеҙ өсөн ҡом-ҡырсынташ ҡушымтаһы ҡулланылған. Тәжрибә күрһәтеүенсә, был ысул һөҙөмтәле түгел. Ҡом-ҡырсынташ тәбиғәт коррозияларына тиҙ бирешеп барыусан. Битум япманың йәйләп йоҡарыуы сәбәпле, уның аша үтеп ингән һыу температура үҙгәргән һайын ярыҡтар барлыҡҡа килтерә. Бәләкәй генә ярыҡтың ҙур соҡорға әйләнеп китеүенә күп кәрәкмәй. Шулай уҡ элек, бигерәк тә совет заманында төҙөлгән юлдарҙың нигеҙе яҡшылап эшләнмәгән, тупраҡтан йүнләп таҙартылмаған һ.б. Шул сәбәпле йылдар үткәс тә юл деформацияға бирелеп, үҙгәреп тора. Ә бөгөн төҙөкләндереү эштәрен алып барғанда өҫкө япмалар ғына ҡабаттан һалына. Хатта өҫкө япмаларҙы сифатлы итеп һалһаң да, "бушаҡ" нигеҙ үҙен хәтергә төшөрәсәк.

Әлеге ваҡытта юл төҙөүселәр асфальт-бетон ҡушымтаһы эшләгәндә ҡом-ҡырсынташтан бөтөнләй баш тартҡан. Уның урынына щебень (таш төрө, ваҡ таш түгел) каркастар ҡулланыла. Улар ныҡ, тәбиғәт шарттарына сыҙамлы. Был талаптарҙың теүәл үтәлеүе тап Юл төҙөлөшө лабораторияһы иненә төшә лә инде. Ләкин, үкенескә күрә, бөтә подряд ойошмаларының да эше дөйөм талаптарға яуап бирмәй. Шуға күрә лә уларға эштәрен яңынан башҡарырға ла тура килә. "Яңы материалдар, технологиялар ҡулланылыуы эште күпкә сифатлы итте, - тиҙәр Юл төҙөлөшө лабораторияһында. - Иң мөһиме һан түгел, ә юлдарҙың сифаты. Һуңғы йылдарҙа һалынған юлдар быны раҫлай килә". Ләкин артыҡ ҡыуанырға ла иртәрәк. Ҡаланың күп өлөшөндәге бушаҡ "нигеҙ" һәм кеше, эшселәр факторы, үҙен озаҡ ҡына иҫкә төшөрөп торасаҡ әле.

**Азамат ТӨХВӘТОВ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитов Standard & Poor`s халыҡ-ара рейтинг агентлығының "Төбәк һәм муниципаль финанстар" Мәскәү офисы директоры Борис Копейкин һәм төркөмдең аналитигы Екатерина Ермоленко менән осрашты. Республиканың финанс-иҡтисади үҫеш мәсьәләләре, төп сәнәғәт тармаҡтарының хәле һәм инвестициялар йәлеп итеү буйынса фекер алыштылар.

✓Республика адреслы инвестиция проекты сиктәрендә 2013 йылда Башҡортостан бюджеты аҡсаһы иҫәбенә 435 километр электр, 290 километр һыу һәм 315 километр газ селтәрҙәре һалынды. Бындай мәғлүмәттәр БР Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты коллегияһының ултырышында килтерелде. Дөйөм алғанда торлаҡ-коммуналь төҙөлөшкә 2,812 миллиард һум йүнәлтелгән. Шул иҫәптән шәхси һәм күмәк төҙөлөш урындарына инженер коммуникацияларҙы ҡороу, ауыл биләмәләрен газ менән тәьмин итеүгә 2,292 миллиард һум ҡаралған.

✓Филүс Яхин Башҡортостандың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. БР Экология министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Филүс Флүр улы Яхин 1977 йылда Ишембай районында тыуған. Рәсәй халыҡтар дуҫлығы университетын "Юриспруденция" һөнәре буйынса тамамлаған. Юридик фәндәр кандидаты.

✓"Ямал" һәм "Ырымбур авиалиниялары" йәйгелеккә Өфө - Сочи тура рейстар асыуҙы планлаштыра. Июндән алып "Ямал" авиакомпанияһы был йүнәлештә аҙнаһына дүрт тапҡыр - дүшәмбе, шаршамбы, кесе йома һәм йәкшәмбе һайын осоу ойоштороорға ниәтләнә. Шундай уҡ рейстарҙы "Ырымбур авиалиниялары" планлаштыра. Йөрөтөүселәр авиабилеттарҙың хаҡын әлегә иғлан итмәгән. Әлеге ваҡытта Өфө һәм Сочи араһында тура рейстар юҡ. Әммә был маршрут ғинуармартта Олимпиадаға әҙерлек һәм уны үткәреү ваҡытында эшләтеп ҡаралды.

✓Яҙғы баҫыу эштәрен финанслауға Башҡортостанда республика һәм федераль бюджеттарҙан 1,6 миллиард һум бүлеү планлаштырыла. 2014 йылда элиталы орлоҡтар алыуға субсидиялар һаҡланыуын да онотмаҫҡа кәрәк. Элиталы орлоҡсолоҡҡа ярҙам итеүгә 18,6 миллион һум ҡаралған. 2014 йылда субсидияланған ауыл хужалығы культуралары исемлегенә картуф һәм һоло индерелгән. Өҫтәүенә, ҡаты бойҙай буйынса ставкалар арттҡан. Әгәр былтыр тоннаһына 2561 һум бирелһә, быйыл ул - 6390 һум.

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

**XX быуат башы айырым милләттәргә, дәүләттәргә һәм бар донъяға йогонто яһаған әһәмиәтле ваҡиғаларға бай. Ул ваҡиғалар Рәсәйгә, унда йәшәгән халыҡтарға ла туранан-тура ҡағыла. Ил сиктәре, дәүләт ҡоролошо ғына түгел, ә дәүләт төшөнсәһе, фекерләү, аң да үҙгәрештәр кисерә был осорҙа. Ошо шарттарҙа башҡорт халҡының үҙаңында ла үҫеш күҙәтелә. XIX быуат "ялынан" һуң, башҡорттар үҙ дәүләтселеген төҙөү кимәленә күтәрелә. Үҙаң үҫешенең нәтижәһе булып, 1919 йылда Башҡорт хөкүмәте менән Совет власы араһында килешеү төҙөү һәм Башҡорт Совет автономияһын иғлан итеү була. 20 мартта был тарихи ваҡиғаға 95 йыл тулды.**

# ТАРИХИ ВАҠИҒА ЭҘЕ...

## Темәскә, Йылайырға, Ишембайға алып барҙы



Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ошо оло тарихи ваҡиғаға арнап, Баймаҡ районының Темәс ауылында күсмә ултырыш үткәрҙе. Күсмә ултырышҡа республиканың көньяҡ-көнсығыш райондар ҡоролтайҙары ағзалары, мәғариф, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре саҡырылғайны. Ултырышты үткәреү урыны итеп тап Темәс һайланыуы бушҡа ғына түгел. Темәс 95 йыл элек яңы төҙөлгән Башҡорт автономияһының беренсе баш ҡалаһы була. Әхмәтзәки Вәлиди, Муллаян Халиҡов, Мстислав Ҡулаев, Ильяс Алкин, Юныс Бикбауев кеүек мәшһүр милләттәштәребеҙ бында халыҡ яҙмышы хаҡында фекер алышыуҙар алып бара. Башҡорт хөкүмәте урынлашҡан "аҡ йорт" бөгөн дә бар. Бында тарихи-мәҙәни үҙәк, уның алдында Әхмәтзәки Вәлидиҙең бюсы урынлашҡан. Сара тап ошонан, бөйөк юлбашсы бюсына сәскәләр һалыуҙан һәм үҙәктәге музейға экскурсиянан башланды. Төбәктең үҙенсәлеген, тарихын сағылдырған экспонаттар менән бергә, Башҡорт хөкүмәте ағзалары һындары көүҙәләндерелгән булмә лә бар музейҙа. Мәшһүр шәхестәребеҙ, әйтерһең, шул саҡтағы кеүек үк, мөһим мәсьәләләрҙе хәл итә... Эйе, Темәс Башҡортостандың баш ҡалаһы ролен оҙаҡ үтәмәй. Ошо составтағы Башҡорт хөкүмәтенең дә ғүмере ҡыҫҡа була. Улар тырышлығы һәм фиҙаҡәрлеге менән өлгәшелгән килешеү ҙә икенсе йылда уҡ юҡҡа сығарыла. Ләкин ошо ваҡиға ла дәүләттең киләсәгенә ҙур йоғонто яһай. Ултырыштың пленар өлөшөндә сығыш яһаусылар ул тарихи осорҙоң төрлө мәлдәренә байҡау яһау менән бергә, 95 йыл элек башҡорт милли хәрәкәте нигеҙ һалған федерализм принциптары тураһында ла һөйләне.

- Килешеүҙең Рәсәй федерализмына нигеҙ һалыуҙағы өлөшө хаҡында иҫкә алыу бөгөн бөтә яҡтан да бик әһәмиәтле, - тине тарих фәндәре кандидаты Азамат Аҡъюлов. - Сөнгөләге "федерализм", "милләттәрҙең үҙбилдәләнешкә хоҡуғы"кеүек терминдар күпмелер ваҡыт юғалыңҡырап торғандан һуң, Украиналағы билдәле сәйәси сәбәптәр арҡаһында хәҙер тағы киң ҡулланыла башланы. Улар илебеҙ Президенты Владимир Путиндың, Федерация Советы Рәйесе Валентина Матвиенконың сығыштарында ла сағылыш тапты. Илебеҙ етәкселеге "милләттәрҙең үҙбилдәләнешкә хоҡуғы, федератив ҡоролош" кеүек төшөнсәләрҙе геополитик юҫыҡта әүҙем ҡулланғас, уларҙы дәүләтебеҙҙең эске сәйәсәтендә лә үтәргә кәрәклекте аңлай башлағандыр, тип ышанғы килә. Шулай итеп, федерализм бөгөн башҡорт, татар, чечен, ингуш һ.б. халыҡтарҙың ғына түгел, ә рус халҡының да (күрше илдәрҙә) милли үҙенсәлектәрен, телен, үҙҙәрен халыҡ булараҡ һаҡлаусы инструмент булып тора...

- Бөгөнгө көндә милли мәсьәлә тағы ла ҡуйырып китте, - тине тарих фәндәре кандидаты Нурислам Ҡалмантаев та ошо теманы дауам итеп. - Бер-ике йыл элек В.В. Путин милли мәсьәләгә арналған темаға доклад яһағанда үҙәк власты көсәйтеү хаҡында һүҙ алып барҙы, әммә федерализм хаҡында бөтөнләй телгә алмағайны. Әле яңыраҡ ул беренсе тапҡыр үҙ телмәрендә "Беҙ халыҡтарҙың үҙбилдәләнеше өсөн", тигән һүҙҙәрҙе ҡулланды. Йәғни милли мәсьәлә өлкәһендә сәйәсәт бер аҙ үҙгәрә һымаҡ. Төп этәргес булып, һис шикһеҙ, Ҡырым көрсөгө тора. Әлеге сәйәси хәл республикабыҙға суверенитет яуланған осорҙағы ҡайһы бер хоҡуҡтарҙы ҡабаттан ҡайтарыу мөмкинлеге, тип әйтер инем. Заманында, Рәсәй Конституцияһына яраштырабыҙ, тип, суверенитетыбыҙҙы раҫлап торған Башҡортостан Конституцияһына күп кенә үҙгәртеүҙәр индерелде. Хатта был йүнәлештә артығыраҡ эшләп тә ташланыҡ шикелле. Шул уҡ ваҡытта Татарстан күп өҫтөнлөктәрен һаҡлап ҡалды. Бөгөн Ҡаҙанда үҙҙәренең 1994 йылда төҙөгән килешеү хәлендә йәшәүҙәре хаҡында ҡыйыу һөйләйҙәр. Шундай уҡ килешеүҙе ул ваҡытта Башҡортостан да төҙөгәйне. Ошо мәсьәләләрҙе күтәреп сығырға ваҡыт, тип уйлайым. Ошо юҫыҡта депутаттарыбыҙ, юристарыбыҙ, йәмәғәт эшмәкәрҙәребеҙ әүҙемләшергә тейеш. Бер һинд аҡыл эйәһе былай тип әйткән: "Һәр милләт башҡа халыҡтар менән бергә донъяны яҡтыртыр өсөн үҙенең аң яҡтыртҡысындағы утты һаҡларға тейеш. Яҡтыртҡысы ватылған милләт донъя киңлектәрендәге законлы урынын юғалта. Яҡтыртҡысы булмағандар бәхетһеҙ, ләкин яҡтыртҡысы булып та уны юғалтҡан йәки оноторғандар мендәрсә тапҡыр бәхетһеҙерәк". Был аҡыллы һүҙҙәрҙе андарыбыҙға һеңдереп, уйланырға, тейешле һығымталар яһарға урын бар...

**(Дауамы 6-сы биттә).**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



# ҮҪӘ, ҮҪӘСӘК!

**2025 йылға тиклем Өфө территорияһында яңы торлаҡ төҙөлөшө күләме 12 миллион квадрат метр тәшкил итергә тейеш. Әлеге ваҡытта ул 17 миллион квадрат метр. Шул сәбәпле, баш ҡаланы аныҡ ваҡытта һәм аныҡ күрһәткестәр менән артабан да тотороҡло үҫтереү өсөн генераль планға үҙгәрештәр индереү талап ителә. Был хаҡта баш ҡала округы хакимиәтендә үткән матбуғат конференцияһында Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө баш идарағы етәксеһе Илдар Ибраһимов бәйән итте.**

Ғөмүмән алғанда, 2010 - 2013 йылдарҙа ҡаланың 70 процент ерен үҙ эсенә алған 95 планлаштырыу һәм ер бүлеү проекты эшләнеп, раҫланған. Әлеге ваҡытҡа "Йүрүҙән" бисҭәһе", "Подводник Родионов урамындағы квартал" проекттары буйынса халыҡ алдында сығыш яһалған, раҫлау өсөн документтар әҙерләнгән.

Шулай уҡ Өфө ярымутрауында "Глумилино-2", "Инорс- 2Б, 4В, 4Б", "Инорс-4", Гастелло исемендәге стадион районындағы бисҭә; Ағиҙел арьяғында "Затон-Көнсығыш" торлаҡ районы, "Дим-6" һәм Новороссийский урамындағы квартал; Ҡариҙел арьяғында "Шаҡша 3Д", "Шаҡша 4Б", "Нуғай-Төньяҡ" торлаҡ районы территорияларын планлаштырыу буйынса документтар әҙерләү эштәре башҡарыла.

"Глумилино-7", "Глумилино-1А", "Инорс-7А", "Романовка" торлаҡ районының төньяҡ һәм көньяҡ өлөштәре, "Яркий" районы, "Ағиҙел арьяғы", Чесноковка ҡасабаһының көнбайыш өлөшөндәге квартал территорияларын комплексы үҙләштереү күҙаллана.

Ҡайһы бер проблемаларҙы хәл итеү өсөн ҡала төҙөлөшө сәйәсәтен ҡайтанан ҡарау, территорияларҙы планлаштырыуҙың яңы документтарын эшләү, урындағы ҡала төҙөлөшө проекты нормативтарын үҙгәртеү талап ителә. Был йүнәлештәге эшмәкәрлек сифатында былтыр августа UrbanБайрам форумы үткәрелде. Уның барышында сит ил экспарттары ҡатнашлығында Ҡаланы үҫтереү стратегияһын әҙерләү буйынса эш сессияһы ойошторолдо. Форум һөҙөмтәләре буйынса Өфөнө стратегик үҫтереүҙең төп йүнәлештәре буйынса дөйөм тәҡдимдәр индерелде. Муниципалитет тарафынан ҡабул ителгән ҡарар нигеҙендә 2036 йылға тиклем Өфөнө үҫтереү стратегияһы проекты һәм уны эшләүгә Техник задание әҙерләнә. Стратегияның төп варианты раҫланғандан һуң сифатлыраҡ һәм һөҙөмтәлерәк, иктисади яҡтан нигеҙләнгән, ваҡыты, ҡала округы территорияһында ҡала төҙөлөшө сәйәсәтен тормошҡа ашырыу буйынса саралар күрһәтелгән генераль план эшләнәсәк.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Эс ҡатҡанда

❖ 1 балғалаҡ тоҙҙо 2/3 стакан ҡайнаған йылымыс һыуға һалырға, 1/3 стакан һөт өҫтәргә, иртәнсәк ас ҡарынға эсергә. Һөҙөмтәһе булмаһа, 2 сәғәттән тағын ҡабатларға.

❖ 3 ҡалаҡ талҡанды 2 ҡалаҡ бал һәм 1 ҡалаҡ тоҙ менән болғатырға. Бер юлы ҡабырға ла, артынан һыу эсеп ҡуйырға.

❖ 30-50 г балды 250 мл һыуҙа болғатып, ас ҡарынға эсергә.

❖ Балды ҡырылған ҡабаҡ менән 1:1 күләмендә ҡушып ашарға, ҡабаҡ сей булһа ла, бешкән булһа ла ярай.

❖ 400 г күрәгәне, 400 г һөйәкһеҙ ҡара емеште, дарыуханала һатылған сенна йәки кассия япрағын ит турағыстан үткәрергә, 200 г шыйыҡ бал ҡушырға. Бергә болғатырға, киске аш ваҡытында 1-әр ҡалаҡ эсергә, артынан йылы һыу эсеп ҡуйырға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

### Артроз

❖ 2 ҡалаҡ еҫле балтырған (сныть) үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут ҡайнатырға. Көн дауамында тигеҙ өлөштәргә бүлеп эсергә.

### Анемия

❖ 2-3 ай дауамында ашарҙан яртı сәғәт алда көнөнә 3 тапҡыр ярты стакан анар һутын һыу менән ҡатыштырып эсегеҙ. Ашҡаҙан менән бәйле сирҙәр булмаҫҡа тейеш.

❖ Йөҙөм һәм кагорҙа тимер, фолий кислотаһы һәм ҡан яһалышы өсөн кәрәкле башҡа микроэлементтар бар. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 1-әр ҡалаҡ шарап эсергә була. Дауаны 1 ай дауам итәһен. 1 аҙна ял итҡәс, дауалау курсын тағы ҡабатлайһың.

### Ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары

❖ 1 ҡалаҡ бал, 1 ҡалаҡ кипкәр (сушеница) үләненә 250 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 30 минут төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Ашҡаҙандың әселеге түбән булһа, ашарҙан ике сәғәт алда эсергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҺУРПАҺЫНА ЕТКӘН...

## уртаһына еткән

Ҡышҡылыҡҡа һуйылған һуғым итенә саҡырышыу йола байрамдары араһында иң таралғаны. Был ваҡытта ауыл кешеләре хужалыҡ эштәренән бер аҙ бушаған була. Шулай ҙа һуғым ашынан тыш, күп ҡунаҡтар саҡырып уҙғарылған башҡа табындарҙа, туйҙа ла итте өләшкә бүлеү билдәле бер тәртиптә башҡарылған.

Ҡунаҡ табынына ҙур батмусҡа өйөп һалынған ит ҡуйыу йомартлыҡ, етеш йәшәү билдәһе булған. Йола буйынса, ҡунаҡтарға тәғәйенләнгән һарыҡ ите 31 (32) өләшкә бүленгән, һуңынан ул һәр кемгә бүлеп бирелгән һәм ит өләшләү йолаһы, тип аталған.

*Ете - бейек арҡа,*
*Ете - тәпәшәк арҡа,*
*Муйыны - етегә,*
*Һигеҙгүҙе - әскә,*
*Ҡойроҡ йәбешкән ере - бер өләш,*
*Янбаш - ике өләш,*
*Урта елек - ике өләш,*
*Икенсе елек - ике өләш.*

Итте өләштәргә хужа кеше бүлгән йәки был эште абруйлы ҡунаҡтарҙың береһенә ҡушҡан. Итте һөйәктән айырып турарға ярамаған, сөнки һөйәк йорт хужаһының малға бай булыуының билдәһе иҫәпләнгән. Ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса, ҡатын-ҡыҙ ҡунаҡтар үҙ өләшөн йорттағы мейескә һөйәлеп ашарға, малдың - уңышын, ғаилә ағзаларының сәләмәтлеген теләргә тейеш булған.

Башҡорттарҙа бигерәк тә ҡабырға, түш ите, янбаш, бот һөйәге, билдәмә, һарыҡ башы, оса һөйәге, эсәк, ҡарта, бауыр, тел юғары баһаланған. Оҙон ҡабырғалар батырҙарҙан тыш, төп ҡоҙаларға, башҡа абруйлы ҡунаҡтарға; түш ите йомғиәттә билдәлелек яулаған кешеләргә бирелгән. Ҡайһы бер урындарҙа туй мәлендә кәләштең әсәһенең апаһының иренә (еҙнәһе) түш итен йәки түшкәнең артҡы өләшөн ашаталар, быға яуап итеп, ул йәштәрҙе үҙ йортона ҡунаҡҡа саҡырырға тейеш. Түш ите ҡатын-ҡыҙ өләшө иҫәпләнгән урындар ҙа бар, шуға ла уны кәләштең апаларына, шулай уҡ кейәү егетенең ҡыҙ туғандары - ҡоҙасаларға бирәләр. Туйға һарыҡтың баш ите бешерелмәй, уны баш ите ашау йолаһына махсус һаҡлайҙар.

Ҡунаҡ үҙ өләшөн шунда уҡ ашаған йәки өйөнә алып ҡайтҡан. Шулай ҙа итте үҙе тәмләп ҡарағандан һуң, уны табындағы күршеләренә лә ауыҙ иттереү йолаһы ла һаҡланған. Табынға аш бирелгәс тә, хужа йәки ҡәҙерле ҡунаҡтарҙың береһе усына ит йәки бишбармаҡ һалып, барыһын да һоғондороп сыҡҡан. Аҙаҡтан ҡунаҡтар бер-береһен һоғондора алған. Бишбармаҡ менән һыйланыу һурпа эсеү менән тамамлана. Ит ашағандан һуң ҡунаҡтарға ҙур булмаған һауыттарға һалып, ҡорот туҡылған һурпа тәҡдим ителгән. "Һурпаһына еткән - уртаһына еткән" тигәндәр, тимәк, был ваҡытта аш табыны уртаһына еткән. Һурпанан һуң ашҡа доға ҡылынған.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# ТАРИХИ ВАҠИҒА ЭҘЕ...

## Темәскә, Йылайырға, Ишембайға алып барҙы

**(Башы 5-се биттә).**

Ултырыштың пленар өлөшөнән һуң бер төркөм башҡорт зыялылары һәм йәштәре Өфө - Темәс - Йылайыр - Ерғән - Салауат - Ишембай - Өфө маршруты буйлап автосәйәхәт ойоштороҙо. Автосәйәхәттең Темәстән һуңғы икенсе туҡталышы Йылайыр ауылында булды. Нимәһе менән иҫтәлекле һуң был ауыл? Тап ошонда азатлыҡ йырсыһы, 1917-1919 йылдарҙағы милли хәрәкәттә әүҙем ҡатнашҡан Шәйехзада Бабичтың һәм тағы бер нисә тиҫтә кешенең ғүмере аяныслы рәүештә өҙөлә. Яҙалау машинаһы ҡорбандарҙы ерләү мәсьәләһенең хәстәрләп тормайынса, барыһын бергә бер соҡорға тултыра. Шәһиттәр ҡәберендә мәңгелек йортон табыусылар һаман булһа шунда ята әле. Бары тик Шәйехзада Бабичтың ғына һөйәктәре танылған ғалим-антрополог Ринат Йосопов кеүек уҙамандарҙың тырышлығы менән үҙенең маҙарын тапҡан. Бөгөнгө көндә был урында бюст ҡуйылған. Йылайырҙағы сара ошо бюст янында үтте лә инде. Шағир исемен йөрөткән лицей-интернат уҡыусылары матур итеп шиғырҙар уҡыны, Шәйехзада Бабичтың милли хәрәкәткә, әҙәбиәткә индергән өлөшө тураһында һөйләне. Эйе, күп тапҡырҙар онотторорға тырышһалар ҙа, совет классигы Булгаковтың "ҡулъяҙмалар үлмәй" тигән һүҙҙәрен раҫлап, шағирҙың рухи мираҫы бөгөн булһа ла йәшәй, азатлыҡ гимны булып яңғырай.

Мәләүез районының Ерғән ҡасабаһы янында ла туҡталды автосәйәхәттә ҡатнашыусылар. Бында Килмәк батыр иҫтәлегенә стела ҡуйылған. Килмәк Нөрөшов халҡыбыҙ тарихының иң ҡанлы биттәренән һаналған 1735-1740 йылдарҙағы ихтилал башлыҡтарының береһе була. Тап ошо урында 1736 йылдың 1 июлендә Килмәк Нөрөшов үҙ отрядтары менән Кирилловтың Ырымбур экспедицияһы менән ҡушылыу өсөн Өфөнән ебәрелгән драгундарҙың 5 ротаһын туҡтата. Ләкин драгундарға өҫтәмә көс ебәрелгәндән һуң, ике фронтҡа һуғыша алмайынса, Килмәк отрядтары сигенергә мәжбүр була. Һуңынан ул ҡулға алына. Өфөгә, Минзәләгә, Санкт-Петербургҡа ебәрелә һәм эҙһеҙ юғала. 1997 йылда Башҡорт йәштәре иттифағы активистары ошо данлы ла, ҡанлы ла йылдарҙың хәтирәһе итеп, алыш булған урынға стела-һәйкәл ҡуя.

Ерғәндән һуң автомобилдәр колоннаһы Салауат ҡалаһындағы милли батырыбыҙ Салауат Юлаев бюсы янында туҡталып китте. Тамара Нечаева көүҙәләндергән һында Салауат ҡарашын йыраҡҡа, гүйә киләсәккә йүнәлткән. Был ҡараш быуаттар буйы алып барылған көрәштең еңеү менән тамамланасағына ишара иткән кеүек... Батша(бикә) Рәсәйе был исемде халыҡ хәтеренән юйҙыра, оноттора алмай. Уңайы сыҡҡас та, ул азатлыҡ символы булып ҡабаттан ҡалҡа, халыҡтың алыштырғыһыҙ милли батырына әйләнә...

Автосәйәхәттең һуңғы туҡталышы Ишембай ҡалаһында урынлашҡан Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се һанлы гимназия-интернатында ине. Рәсәй федерализмы "атаһы"ның исеме бар донъяға билдәле. Әлбиттә, сит илдәрҙә уны күберәк ғалим-төркиәтсе тип беләләр. Ләкин ул, тәү сиратта, ауыр сәйәси шарттарҙа яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алып, халыҡты ойоштора, үҙәк власть менән уртаҡ тел табып, килешеү төҙөй алған мәшһүр сәйәсмән, юлбашсы. Шәхесенә совет замаңында ла, бөгөнгө көндә лә күп ҡара яғылыуға ҡарамаҫтан, ваҡыт уның ҡараштары, идеялары хаҡлығын йәнә һәм ҡайта-ҡайта раҫлай. Милләт юлбашсыһы исемендәге гимназияла уның вариҫтары - рухлы ла, Ватан, милләт тойғоло егет-ҡыҙҙар уҡый бөгөнгө көндә. Гимназия уҡыусылары, белем усағы етәкселәре ҡунаҡтарҙы йылы ҡаршы алды. Тарихтың 95 йыл элек булған осоро хаҡындағы сығыштарҙан һуң, ҡурай моңо аҫтында Шәйехзада Бабичтың үлемһеҙ шиғырҙары яңғыраны.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Автосәйәхәтте ойоштороусы БР Мәҙәниәт министрлығының Тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлау буйынса фәнни-ғәмәли үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин әйтеүенсә, сара маҡсатына өлгәште. "Шаңлы тарихыбыҙҙың мәшһүр биттәре яҙылған урындарҙы гиҙеү, ошо ваҡиғаларға ҡағылышы булған кешеләргә хәтергә төшөрөү, ул кешеләрҙең ҡәберҙәренә, бюстарына сәскә һалыу ҙур символик мәғәнәгә эйә. Ул заман (1917-1919-сы йылдар) халыҡтың үҙаңын билдәләүсе һынау осоро була. Ошо осорҙа халҡыбыҙ хәл иткес мөһим аҙым яһай. Ақтарҙан ҡыҙылдарға күсеү, автономия хаҡында килешеү төҙөү еңелдән булмай. Ләкин ошондай шарттарҙа ла халыҡ лидерҙары, башҡорттар юғалып ҡалмай. Эйе, беҙ был датаны, ул ваҡиғаларҙы онотторға тейеш түгелбеҙ. Уларға беҙҙең тарихыбыҙ ғына түгел, рухыбыҙ ҙа һалынған. Киләсәккә пландар төҙөгәндә, халҡыбыҙҙың яҙмышы хаҡында уйланғанда бер быуат тиерлек элек булған ваҡиғаларҙы ла күҙ уңында тоторға, уларҙан фәһем алырға тейешбеҙ", тине Данир Әхмәҙи улы.**

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**







*✓ Сибай ҡалаһында музыка мәктәбендә, аҙаҡ Өфөлә Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге республика гимназия-интернатында, БДУ-ның журналистика факультетында белем алдым. Фортепианола, ҡурайҙа, баянда уйнай, йырлай беләм.*



# ҮТӘ ЕТДИ БУЛЫРҒА ЛА ЯРАМАЙ — донъя ауырлығы биленде һындырыуы бар

**Борон-борон заманда түгел, ә тап беҙ йәшәгән көндәрҙә бер батыр ер-һыу күреү, бәхет эҙләү маҡсатында оҙон юлға сыҡҡан, ти. Бара торғас, бер оло йылға ярына килеп төртөлгән. Йылға шундай киң һәм мул һыулы - бер ярынан ҡысҡырһаң, ҡаршы ярҙа торған кешегә саҡ-саҡ ишетелерлек, ти. Егет йылға аша һалынған мөһабәт күпер буйлап атлап киткән. Шул ваҡыт күкте ҡара болоттар ҡаплап алған да, дауыл ҡупҡан, бер аҙҙан йәшенләп ямғыр яуа башлаған. Егет ғәрәсәт уртаһында ҡалған. Ҡулсатыры булмағанға күрә, үтәнән-үтә һыуланған, күшеккән. Артына әйләнеп ҡараһа, күперҙең саҡ урта биле тәңгәленә генә еткән икән. "Ҡайҙа барырға? Белгән яҡҡа кире борололорғамы, әллә билдәһеҙлеккә ынтылып, юлды дауам итергәме? Ҡайтһам, ете диңгеҙ аръяғындағы тылсымлы ҡаланы күреү тигән хыялым тормошҡа ашмай ҡалыр инде..." тип уйға ҡалған егет... Был тарихтың аҙағын аҙ ғына һуңыраҡ һөйләрбеҙ. Әлегә һүҙҙе икенсерәк юсыҡҡа йүнәлтәйек. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ -Башҡорт асыҡ КВН Лигаһы уйындары финалисы, бер кешенән торған "Кәкре Сүкеш" КВН командаһының капитаны ла, актеры ла, авторы ла булған Фидан ҠОЛМӨХӘМӘТОВ. Беҙ уның менән тормоштоң ҡатмарлы һынауҙарын еңелерәк үтеү юлын күрһәтеүсе башҡорт юморы тураһында әңгәмәләшербеҙ, һүҙ ыңғайында егеттең тормошонда булып үткән ҡайһы бер ҡыҙыҡлы хәлдәр тураһында ла бәйән итербеҙ, "күшеккән егет" тарихының аҙағын да ишеттерербеҙ.**

**▸ Фидан, 25 февралдә Милли йәштәр театрында Башҡорт асыҡ КВН Лигаһының ярымфинал уйындарында һин барыһын да көлдөрөүең менән бер рәттән, матур итеп йырланың, музыкаль инструменттарҙа ла уйнаның, Пушкиндың "Евгений Онегин" романынан өҙөк тә күрһәттең һәм баһалама комиссияһы ағзаларының иң юғары баһаһына ла өлгәштең. Тамашасылар ҙа һинең сығышыңды ныҡ оҡшатты. Күптәр һине профессиональ музыкант булараҡ та асты. Кем һуң һин - үҙең менән таныштырып үт әле...**

Мин Әбйәлил районы Әбделмәмбәт ауылында 1990 йылда тыуып, Баймаҡ районында үҫкән кешемен. Минең телем "суверенитет" һүҙе менән асылған, тиҙәр. Әлбиттә, биш йәшемдә бер һүҙ булһа ла әйтергә өйрәнеүемә әсәйем ныҡ ҡыуанған. Әйткәндәй, әллә әсәйем шул мәлдә үк 2013 йылда буласаҡ ташҡынды алдан һиҙгәнме, әллә Әбйәлил еләктәре уға ваҡ тойолғанмы, беҙҙе алып, Баймаҡ районына күсеп киткән. Игеҙәгем Айгизәне, мине һәм ағайым Вадимды әсәйебеҙ яңғыҙы үҫтерҙе. Бәләкәйҙән ағайыма тарайған кейем-һалымды мин кейә торғайным. Рәсем дәресенә фломастерҙар, уҡыу өсөн бүтән кәрәк-яраҡтар һатып алыр өсөн йәйге каникул ваҡытында ауылдаштарға (Баймаҡ районы Түбә ауылында) ялланып бесән сабыуым, картуф утап-күмеүем, утын ярыуым да хәтерҙә ҡалған. Әммә беҙ бер ҙә күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәнек. Ағайым бигерәк шаян, игеҙәгем Айгизә - етдиерәк, әммә ул да шаяртыуҙы аңлай торған кешеләр. Бәләкәй сағымдан башҡаларҙы көлдөрөргә яраттым. Үҙем эләгеп ҡолаһам, эргәләге кешеләрҙең көлөүенә ҡушылып, көлөп ята бирә торғайным. Әсәйем ундай саҡтарҙа: "Кит, кеше көлдөрөп ятма, тор!" - тип, шелтәләй ине. Ә миңә ҡыҙыҡ, ҡалғандар көлһә, рәхәт булып ҡала. Әле лә сәхнәгә ынтылыуымдың бар ғилләһе - кешене көлдөрөп, рәхәтлек алыу. Әйткәндәй, минең КВН-сы булыуымды ишеткән күп кенә кешеләр йыш ҡына: "Йә, ошо урында шаяртып күрһәт әле", - тип үтенә. Ә мин көлдөрһәм дә, килде-китте хәбәр һөйләй алмайым бит инде, шуға итәғәтле генә итеп баш тартыуҙы ҡулайыраҡ күрәм.

Сибай ҡалаһында музыка мәктәбендә, аҙаҡ Өфөлә Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге республика гимназия-интернатында, БДУ-ның журналистика факультетында белем алдым. Фортепианола, ҡурайҙа, баянда уйнай, йырлай беләм. Мәктәптә лә, гимназияла ла музыка йүнәлешендә уҡып, юғары белем алыу ваҡыты еткәс, журналислыҡ һөнәренә йөҙ бороуым минең өсөн дә, туғандарым өсөн дә көтөлмәгән боролош булды. Улар һаман мине артист булыр тип өмөтләнә. Уның ҡарауы, БДУ-лағы абруйлы остаздарым, факультеттағы башҡорт мөхите мине туған телемә, халҡыма, рухи ҡиммәттәребеҙгә яҡынайтты. Мәктәп йылдарында ла, университетта ла рус телендә шиғырҙар яҙған булһам, әле бына яңыраҡ башҡорт телендә лә шиғыр яҙып ҡараным һәм "Килеп сыға бит!" тигән һығымта яһаным. Артабан да яҙышырға ниәтем бар. Әйткәндәй, ярымфинал уйындарында яңғыраған "Евгений Онегин"дан өҙөктө башҡортсаға үҙем ауҙарҙым. Тамашасыға оҡшаны, буғай.

**▸ КВН тигәндәй, был өлкәлә һин ярайһы уҡ тәжрибә туплаған кешеһең, ахыры. Баш ҡаланың башҡорт балалары араһында үткән "Шаяниум" отҡорҙар һәм тапҡырҙар бәйгеләрендә лә ҡатнашыуың тураһында беләбеҙ...**

Эйе, 2008 йылдан Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге республика гимназия-интернатына уҡырға килгәне бирле үҙ итәм был уйындарҙы. Ул саҡта "Ҡыҙыҡ-мажор"ҙың беренсе составында уйнарға тура килгәйне. 2012 йылға тиклем мин Рәфис исемле дуҫым менән "Горняк-Дозор" командаһында уйнаным. Рәфис уйындарҙан ситләшкәс, бер үҙем ҡалдым. Командаға яңы егеттәр һәм ҡыҙҙар алғым килмәне. Бүтән кеше лә эҙләп торманым, быйылғы фестивалгә бер үҙем сығырға ҡарар иттем. Бер үҙем ҡалдым, тип ҡайғырырғамы ни? Ҡайғырып йәшәүгә ҡарағанда, көлөп йәшәүе еңелерәк...

**▸ Юморҙың төрлөһө була: әсеһе, тағы кешенең кәмселектәренән, кире сифаттарынан көлгән саҡта бар сиктәрҙе үтеп киткән тупаҫы ла... "Ҡара юмор" тигән төшөнсә лә бар. Ә һинең юморыңдың тәбиғәте ниндәй?**

Халыҡсан юморҙыр, тип уйлайым. Сөнки мин идеяларҙы "һауанан" алмайым, тексты "бармаҡтан һурып" яҙмайым, ә халҡыбыҙ араһында киң таралған лаҡаптар йыям. Мәҫәлән, минең сығыштарҙа ауыл тематикаһы киң яҡтыртыла. Көлкөләрҙе мөмкин тиклем үткерерәк итергә тырышам. Көлкө яҙыу - әҫәр яҙыу һымаҡ уҡ ауыр шөғөл. Өҫтәл артында яҙышып ултыраһың-ултыраһың да, оҡшамаһа, ҡағыҙҙы йомарлап ырғытаһың. Унан өр-яңы биттән өр-яңы текст яҙып та ҡуйыла. Ҡабат-ҡабат эшләгәнгә күрә лә, минең текстар тамашасы тарафынан да, баһалама комиссияһы тарафынан да йылы ҡабул ителәләр. Миңә башҡорт телендәге "Атаҡ-атаҡ!", "Ыста-ыста!" һымаҡ ымлыҡ һүҙҙәр, "йомшағыраҡ" әрләшеү һүҙҙәре оҡшай. Мин уларҙы бик яратып файҙаланам.

Уңышлы КВН-сы булыу өсөн тамашасыны көлдөрөү генә етмәй, уйландыра белеү ҙә зарур. Ә бының өсөн донъялағы хәлдәр, һин һүҙ алып барған өлкә, ваҡиға тураһында етерлек кимәлдә хәбәрҙар ҙа булырға, үҙеңә лә уйлана, сағыштыра, һығымта яһай белергә кәрәк. Миңә тормош тәжрибәм, шулай уҡ китаптар уҡыу ярҙамға килә. Халҡымдың үткәне һәм бөгөнгөһө менән дә ҡыҙыҡһынып йәшәйем, уның тураһында яңынан-яңы мәғлүмәттәр йыям, күңелемә һеңдерә йөрөйөм...

**▸ Булып үткән Башҡорт асыҡ КВН Лигаһының ярымфинал уйындарында ҡатнашҡан коллегаларыңдың сығыштары тураһында ни әйтерһең? Кемдәрҙең шаяртыуын оҡшаттың, ә кемгә тағы тырышыбыраҡ әҙерләнергә кәңәш итер инең?**

Һорауыңдың икенсе яртыһынан башлайыҡ. 19 февралдә булып үткән уйындарҙа "Бытбылдыҡ"тарҙың, "Өтөр"ҙәрҙ-



***Мин идеяларҙы "һауанан" алмайым, тексты "бармаҡтан һурып" яҙмайым, ә халҡыбыҙ араһында киң таралған лаҡаптар йыям. Мәҫәлән, минең сығыштарҙа ауыл тематикаһы киң яҡтыртыла. Көлкөләрҙе мөмкин тиклем үткерерәк итергә тырышам. Көлкө яҙыу - әҫәр яҙыу һымаҡ уҡ ауыр шөғөл. Уңышлы КВН-сы булыу өсөн тамашасыны көлдөрөү генә етмәй, уйландыра белеү ҙә зарур. Ә бының өсөн донъялағы хәлдәр, һин һүҙ алып барған өлкә, ваҡиға тураһында етерлек кимәлдә хәбәрҙар ҙа булырға, үҙеңә лә уйлана, сағыштыра, һығымта яһай белергә кәрәк. Миңә тормош тәжрибәм, шулай уҡ китаптар уҡыу ярҙамға килә. Халҡымдың үткәне һәм бөгөнгөһө менән дә ҡыҙыҡһынып йәшәйем, уның тураһында яңынан-яңы мәғлүмәттәр йыям, күңелемә һеңдерә йөрөйөм...***

ең, ә 25-ндә "Страйк"тарҙың сығыштары оҡшаны. 14 апрелдә Ҡала мәҙәниәт һарайында 19 сәғәттә үтәсәк финал уйындарында бытбылдыҡтар менән страйктарҙы мин үҙемдең төп дәғүәселәрем тип һанайым. Мәскәүҙән килгән "Хәйнешондар"ҙы барыһы ла ярата. Ярымфинал уйындары алдынан интернет селтәрендә үткәрелгән тауыш биреүҙән күренеүенсә, күпселек тап ошо команданың финалға сығасағына ышаныс белдергәйне. Тик егеттәргә тәжрибә етенкерәмәне, шикелле. Шаяртыуҙары ла шәп ине былай...

Тәүге һорауға - командалар сығыштарының эстәлегенә килгәндә, мине шул ҡыуандыра: йәштәр үҙ фекерҙәрен ҡыйыуыраҡ белдерә башланы. Тимәк, халҡыбыҙ фекерен, уның мәнфәғәттәрен тәғәйен кешеләргә ишеттерә торған трибуна барлыҡҡа килде, тигән һүҙ. Тик йәштәр үҙ сығыштарында сама тигән нәмәгә лә иғтибар итһен ине. Айырым командалар сығыштарында ҡатын-ҡыҙҙарҙан көлөү ғәҙәте йышайҙы. Ҡатын-ҡыҙҙарҙан көлөргә ярамай, минеңсә. Уларҙы нисек бар, шулай, йәғни бөйөк һәм бейек итеп ҡабул итергә кәрәк. Улар КВН-да сығыш яһай икән, шул килеш - гүзәл зат образында яҡтыртылырға тейеш. Юғиһә, халҡыбыҙҙың иң ҡиммәтле, иң ғәзиз ҡатын-ҡыҙ төшөнсәһенә бысраҡ яғыусылар ҙа осрап тора. Әйҙә, егеттәр тураһында теләһә нисек итеп шаяртһындар, көлһөндәр - унан ғына егет кешенең дәрәжәһе кәмемәй.

Тағы, эпосыбыҙ "Урал батыр"ҙы ла КВН сәхнәһенә алып сығыр алдынан ете ҡат үлсәргә кәрәк. Ғөмүмән, бындай ҡомарҡыларыбыҙҙан көлөүгә табу һалынырға тейеш. Юғиһә, тап ошо ике төшөнсәгә - башҡорт ҡыҙы образына һәм мәшһүр эпосыбыҙға һаҡһыҙ тотонғандары өсөн ҡайһы бер командалар тураһында күңелһеҙ тәҫораттар ҡалды.

Ҡатын-ҡыҙҙар темаһына ҡағылыуын ҡағылғас, күңелде өйкәп торған тағы бер нәмә тураһында ла әйтмәй булдыра алмайым. Тик ҡыҙҙарҙан ғына торған командаларҙы егеттәр менән "байытырға" кәрәк, минеңсә. Ана бит, ҡыҙҙарҙан ғына торған "Хыялыйҙар" командаһына егеттәр ҙә килеп ҡыҫылғас, ҡыҙыҡлы ноталар барлыҡҡа килде. Ғөмүмән, КВН-ды (шартлы рәүештә, әлбиттә) сәсәндәр әйтеше менән сағыштырһаҡ, бик күп уртаҡлыҡтар табырға булыр ине. Ә халҡыбыҙҙа сәсән - ул фәҡәт ир затынан булған, ти философия фәндәре кандидаты, этнограф Зәкирйән Әминев. Шуға, бәлки, юмор өлкәһендә егеттәр генә сығыш яһаһа, яҡшыраҡ булмаҫ инеме икән? Башҡорт КВН-ы сәсәнлек традицияларына ла таянырға тейеш минеңсә. Башҡорттоң бай фольклорына, тарихи үткәненә, ата-бабаларҙың ғөрөф-ғәҙәттәренә нигеҙләнгән юмор ғына милли юморыбыҙҙың йөҙөн билдәләй. Беҙ үҙ сығышыбыҙҙы ошо үҙенсәлектәргә нигеҙләп ҡорорға тейешбеҙ. Әгәр шулай түгел икән, беҙҙең сығыш аҡ ҡағыҙ битенә аҡ буяу менән нимәлер яҙыуға бәрәбәр буласаҡ.

**Бер тапҡыр үҙеңдең "автостоп" менән мауығыуың тураһында ла һөйләй биреберәк ҡуйғайның. Шул турала ла ишетке килә бит әле...**

Бер ваҡыт дуҫым Салауат менән зәңгәр экрандарҙа "Достучаться до небес" исемле фильм ҡараныҡ. Шунда икебеҙҙә лә диңгеҙҙе барып күрергә тигән хыял барлыҡҡа килде. Әлеге фильмдағы геройҙар - үлемесле ауырыуға дусар булған ике егет, төрлө кәртәләр үтеп, закондар аша атлап, диңгеҙгә барып етәләр. Беҙ был эште законлы юл менән атҡарырға булдыҡ. Ҡара диңгеҙгә юлға сығырға хәл итеп, сығып китеү көнөн билдәләнек. 20 көндән һуң икебеҙ ҙә рюкзактар артмаҡлап, килешелгән ерҙә осраштыҡ. Бер ни өндәшмәй генә Иглин яғына юлланыусы автобусҡа билет алып ултырҙыҡ. Һуңғы көнгә тиклем мине төрлө шикле уйҙар борсоно. Хәүеф тойғоһо ла бар. Иглин янында оло юлда төшөп ҡалдыҡ та, юлдағы машиналарға ҡул күтәрә башланыҡ. 15 минут үттеме, юҡмы, бер водитель ултыртып алды. Беҙ уға ниндәй маҡсат менән юлға сығыуыбыҙҙы һөйләп бирҙек. Төндә Һарытау өлкәһенең Сызрань ҡалаһы ситенә килеп еттек тә, яланда палаткабыҙҙы ҡороп, усаҡ яғып, дөгө бешереп, сәй ҡайнатып эстек. Таң менән тағы юлға сығып баҫтыҡ. Был юлы ла уңыш йылмайҙы - Сочиҙың үҙенә юлланыусы ағай ултыртып алды, уның иркен машинаһында ике көн эсендә рәхәтләнеп барып та еттек. Сочиға килеп төшкәндә, таңғы сәғәт 4 ине. "Ҡайҙа диңгеҙ?" тип, Салауат менән тирә-яҡҡа ҡарашабыҙ. Бер ваҡыт талғын ғына шау ҡолаҡҡа салынды. Беҙ тот та шул яҡҡа табан йүгер! Диңгеҙгә етеү менән сисенеп ташлап, таң менән һыу инә башланыҡ. Эх, ул мәлдәге ҡыуанысты һүҙҙәр менән генә лә аңлатырлыҡ түгел! Ҡара диңгеҙ ярында бер аҙна ял иттек, ҡояшта ҡыҙынып, ҡарайышып бөттөк. Сочиға ял итергә килеүсе турист халҡы Абхазия тәбиғәтен үлтереп маҡтағас, ҡайтабыҙмы, әллә Абхазияға барабыҙмы, тип, бер аҙ икеләнгәндән һуң, ҡыҙыҡһыныуыбыҙ еңде. Ысынлап та, был илдә шарлауыҡтар күп һәм матур икәнлегенә инандыҡ. Тауҙары тураһында әйтеп тә тормайым.

Ат ҡайтыу яғына еңелерәк тартһа, беҙ ҡайтыр юлды килгәндәге һымаҡ тиҙ үтмәнек. Юлға сыҡҡанда кеҫәбеҙҙә дүртәр мең аҡсабыҙ бар ине, нисек кенә ҡыҫып тоторға тырышһаҡ та, уныһы ла бөттө, ярай әле, водителдәр ярҙам итте - кем 100 һум, кем 50 һум аҡса биреп китте. Әйткәндәй, ошо сәйәхәттән һуң миндә водитель һөнәренә ҡарата яңы мөнәсәбәт барлыҡҡа килде. Оло юлда йөрөүселәр ҡалалағы һөмһөҙ водителдәрҙән ҡырҡа айырыла икән: улар шул тиклем кешелеклеләр. Бәлки, оҙон юл хәүефе әҙәми затты кешелеклерәк итәлер?

Был сәйәхәттән һуң ике йыл үткәс, бер үҙем Санкт-Петербург ҡалаһына юлландым. Ҡулыма диплом алған, эшләп тә йөрөгән саҡ ине. Аҙмы-күпме аҡса тупланым да, тағы сығып киттем. Түбәнге Новгород аша үткән саҡта Ока йылғаһы аша һалынған күпер уртаһында (мәҡәлә башында һүҙ барған) йәшенле ямғырға эләктем. Алға йүгерергәме? Артҡамы? Күперҙең урта тирәһендә торам икән. "Әһә! Алда бер ҡоролма күренә, шунда ышыҡланайым", - тип, алға киттем. Ел мине тегеләй ҙә, былай ҙа бәүелтә. Сиркәү эсенә килеп инеп, поптан ҡоро кейемдәремде кейеп алырға рөхсәт һораным. Ул рөхсәт итте, мин кейенеп алдым. Сиркәүгә тәү тапҡыр ингәнгә күрә, мәсеттән нимәһе менән айырыла икән, тип, уны ҡарап йөрөй башланым. Арғы яҡта йырлап торалар, кешеләр суҡына, тәреләр ҡуйылған, майшәмдәр яна... Ахырҙа, бер әбей: "Улым, ә һин ниңә доға уҡымайһың? Әйҙә әле, мин һине суҡындырайым", - тип яҡынлашҡас, "Юҡ, рәхмәт, кәрәкмәй", - тип, сығып китергә тура килде.

Өфө-Санкт-Петербург юлында Татарстандағы бер икмәк заводы биләмәһендә ҡарауылсынан рөхсәт һорап, йоҡлап сыҡтым. Бара-бара Мәскәүҙе үттем, Санкт-Петербург ҡалаһына ла еттем. Унда бер дуҫымда ҡундым да, ҡала менән танышҡас, поезд менән ҡайтырға сыҡтым. Бер үҙем булғас, күңелһеҙ ине, шуға "тимер ат"ҡа ултырҙым. "Автостоп" менән бер "ауырығас", туҡтауы, ай-һай, еңел түгел икән! Яңынан-яңы ерҙәрҙе барып күрге килә. Әле бына яҡын киләсәктә Байкал күленә сәфәр сығырға хыялланам. Беҙҙең йәштәргә, айырыуса 18 йәштән үткән йәштәргә, йыш ҡына "алйотланып" алыу етмәй. Улар бөгөн шул тиклем "дөрөҫ"тәр, уларҙың тормоштары ла төҫһөҙ, уҡыуҙары ла, эштәре лә яйһыҙ. Балаларса ихласлап ҡыуанырға, балалар һымаҡ шыршыға эленгән тәтәй артынан үрмәләргә онотоп барабыҙ түгелме? Ә тормошта үтә етди булырға ла ярамай - донъяның ауырлығы билеңде һындырыуы бар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Фидандың бер сығышынан өҙөк. "Хәтәр район ул - Баймаҡ районы. Баймаҡта ғына "Һаумыһығыҙ!" тигәнгә, "Һауҙырһағыҙ, һауырбыҙ!" тигән яуап ишетергә була. Туҡмалыу, ғәҙәттә, ошо фразанан һуң башлана ла инде (әйткәндәй, мин шуға ла "нейҙе" ҡыҫып, Өфөлә ултырам). Баймаҡ - боронғо гректарҙың Спартаһы һымаҡ: халҡы шундай рухлы, уларҙың ҡатындары ла "Мин - башҡорт!" тип күкрәк һуға, шуға ла балаларына һөт урынына ҡаймаҡ имеҙә, имеш..."**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ӨФӨЛӘРГӘ БАРАМ ӘЛЕ...



# ҠАЛАНЫ МАҠТА ЛА...
## ауылда йәшә!

**Ун беренсе класта уҡығанда яҙғы каникулдар мәлендә Өфөлә бер конкурстың 2-се турына саҡырыу алып, ҡанатланып юлға сыҡтыҡ әсәйем менән. Кистән Сибай-Өфө поезына Магнит ҡалаһынан килеп ултырҙыҡ. Кеҫә телефоны юҡ. Ауылдағы мәктәп телефонынан ҡалалағы апайымдарға килеүебеҙ тураһында хәбәр иткәйнек, еҙнәм иртән поездан ҡаршы алырға тейеш ине.**

Ҡара таңда шулай тәүге тапҡыр баш ҡалаға аяҡ баҫтым. Еҙнәм менән аймылыш булып, осраша алманыҡ. "Тел Киевҡа ла еткерә", тиҙәрме әле, һораша-һораша, бер автобустан икенсеһенә күсеп ултыра-ултыра килеп төштөк ҡала янындағы апайымдар йәшәгән ҡасабаға. Тик йорттарын таба алмайбыҙ ҙа ҡуябыҙ. "66" тигән йорт юҡ, 60-та бөтә. Халыҡ эшкә ҡыбырлай башлағас, уныһынан-быныһынан һорашабыҙ. Апайымдарҙың исем-фамилияһын, эшләгән ерен әйткән булабыҙ, юҡ, берәү ҙә белмәй. Ошо хәл мине бигерәк тә аптыратҡайны. Ауылда бит бер-береһенең мал-тыуарын ғына түгел, эт-ҡошон да бала-сағаға тиклем танып тора. Шунда ауылымды һағыныу тойғоһо биләп алғайны күңелде. Шулай ҙа һорашҡан кешеләр араһынан белде берәүҙәре. Беҙ барып инһәк, апайым өйҙә, еҙнәм вокзалда йөрөй аптыранып. Шылтыратып, ҡайтартып алдыҡ. Эх, шунда кеҫә телефонының булмауы...

Конкурс ҡанатландырҙы, 3-сө дәрәжә диплом алдым. Бер уҡытыусы менән һөйләшеп, репетиторлыҡҡа йөрөй башланым. Артыҡ бер нәмәгә лә өйрәтмәне өйрәтеүгә, минең белем кимәлен дә тикшереп торманы. Ә шулай ҙа ул ваҡытта ярайһы ғына ҙур сумма - 6 мең һум буштан-бушҡа уның кеҫәһенә инеп ятты. Әсәйем ҡайтып китте, мин репетиторға йөрөүемде дауам иттем. Тик ул уҡытыусыны ҡайһы көндәрҙә өйҙә тап итә алмайым, белешергә телефон юҡ. Шул 6 мең һумға ике яңы телефон һатып алырға булыр ине, тип уйлап ҡуям шундай саҡтарҙа.

Баш ҡала миңә тиҙ генә баш бирергә теләмәне, уҡырға инеүгә балым етмәне, түләүле бүлеккә эләктем. "0,5 кенә балл етмәне", тип илағанда "Эй, миңә әйтмәй ни, 3 литр итеп ебәрер инем ул балды", тип, көлдөрөп маташты туғандар. Балын да алып барған инек тә ул, әҙ булғандыр инде...

Ятаҡта урын булмағас, фатир эҙләргә тура килде. Шуның өсөн махсус рәүештә август башында уҡ барҙым Өфөгә, тик табып булмай ҙа ҡуя. Иғландар буйынса шылтыратам, барып ҡарайым, юҡ, йә бик ҡиммәт, йә уҡыу йортонан бик алыҫта. Юлға ла аҡса түгергә кәрәк буласаҡ бит. Шулай бер ҡыҙ менән бер иғлан буйынса киттек йортто эҙләп. Йорт хужаһы бер бабай икән. Ике ҡыҙҙы индерәм, тигән яҙыуы буйынса барһаҡ та, минең менән барған ҡыҙҙы әллә оҡшатманы, әллә икенсе сәбәптән, фатирға мине генә индерергә булды. Ризалашманыҡ. Тағы бер фатир таптым, уҡыу йортона юл аша ғына. Эй ҡыуаныуым! 20 көн тигәндә табылды бит! Кискә күсеп килергә һөйләшеп ҡайтып киттем. Ике туған апайым мине ҙур сумкаларым менән оҙатып китте. "Айырылып сығыуҙарың ошо микән инде, балаҡайым!" тип, өләсәйем илап ултырып ҡалды. Юҡ, мин ҡала ситендәге районда, апайымдарҙан барып еткәнсе, икенсе ҡыҙҙы индергән, кире ауыр сумкалар күтәреп, ҡайтып индек. Был юлы мин илайым...

Икенсе көндө Пушкин урамының икенсе осонда ағас йортта йәшәгән бер әбейҙең иғланы күҙгә салынды. Йүгерҙем. Әбей менән байтаҡ һөйләшеп ултырҙыҡ. "Яңы ғына бер ҡыҙ күсеп килермен тип сығып китте бит әле, тик ул күңелемә бик ятмағайны, һине индерәм дә ҡуям, хәҙер үк күсеп килә һал", - ти был. Был юлы мин сосораҡ булып сыҡтым...

Ике ай йәшәгәс, арзаныраҡ һәм уҡыу йортона яҡыныраҡ икенсе йорт табып, күсеп киттем. Унда ла ҡыҙыҡтар күп булды. Ағас йортобоҙҙоң эргәһенән генә юл үтә. Тәҙрәләр ҙур. Үтеп барған гүзәл зат, туҡтап, тәҙрәбеҙҙәге сағылышына ҡарап, кейемен, сәстәрен төҙәтә. Өлгөрһәк, беҙ ҙә ҡаршыһына тороп, эс яҡтан уларҙың хәрәкәтен ҡабатлайбыҙ...

Хәҙер уйлайым да, ҡурҡып ҡуям: фатирға индерәм, тигән белдереү буйынса бараһың, ялған иғлан биреп, насар ниәт менән һине көтөп ултырыуҙары ла мөмкин бит. Телевизорҙан да күреп, ишетеп торабыҙ. Хоҙай аралаған һәм ҡурсалағандыр берәүҙең бер бөртөк балаһын. Ҡаланы яҡшылап белмәгән килеш сығып китеп, туҡталышта яңылыш юлдың икенсе яғынан ултырып, тәҙрәнән таныш туҡталыш ҡарап барып, һуңғыһына тиклем килеп, яңынан ултырып ҡайтып етеү осраҡтары күп булды. Тәүге ауырлыҡтарға сынығыуым ошонан башланды, унан имтихан тапшыра-тапшыра сыныҡтыҡ. Юғары уҡыу йортона килгәндә һиңә бөйөк кешеләр булып күренгән бәғзеләрҙең имтихандағы ғәҙелһеҙлектәре арҡаһында күҙгә күренеп абруйҙары төшөүенә лә шаһит булдыҡ...

Ә шулай ҙа матур ҡала Өфө! 1-се курста уҡығанда "Халыҡтар дуҫлығы" Йортон төҙөр алдынан беҙҙән, талиптарҙан, ҡултамғалар йыйҙылар. Беҙҙән рөхсәт һорайҙар, тип, танауыбыҙ күккә күтәрелгәйне шул саҡта. Күҙгә күренеп төҙөкләнә, матурая баш ҡала. Әммә һағынып, һағындырып ҡунаҡҡа килеү өсөн генә ул хәҙер минең өсөн. Кеше фатирында йәшәп, бер ниндәй бол тупламай, ҡасан сығарып ебәрәләр инде, тип ҡурҡып йәшәгәнсе, ауылдағы иркен үҙ йортоңда балаларыңды, күршем ял итәлер тип ҡурҡмай, рәхәтләнеп уйнатып, мал туплап, ысынлап донъя көтөүгә ни етә!

**Альбина САДИҠОВА.**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ



# ӘҮЛИӘЛЕК - БӨЙӨК КӨС УЛ,

## йәғни Мифтахетдин мулла тураһында бер хәтирә

### Ен алыштырған Мостаҡ

Мифтахетдин әүлиәнең тормошо нисек башланып киткән? Был турала артыҡ күп мәғлүмәттәр юҡ кеүек. 1834 йылдағы халыҡ иҫәбен алыу материалдары буйынса Кинйәбулат ауылында 23-сө булып Ҡолгилде Муллағоловтың ғаиләһе теркәлгән. Ул үҙе 1832 йылда 70 йәштәр тирәһендә яҡты донъяны ҡалдыра. Ул саҡта уның оло ҡатыны Фатимаға 78 йәш була. Фатима Ҡолгилденең үлгән ағаһының ҡатыны була, тимәк, боронғо йола буйынса ҡайнеше еңгәһенә өйләнгән. Икенсе ҡатыны Ҡыуандыкҡа 48 йәш булған, унан тыуған балалары: Ҡотлоәхмәт - 23 йәштә, Ҡотломөхәммәт - 19 йәштә, Йәрмөхәмәт - 16 йәштә, ҡыҙҙары Шәрифә 9 йәштә. Тимәк, 1834 йылда Ҡотломөхәммәткә 19 йәш булғас, улы Мифтахетдин тыуғанда уға 42 йәш була. Мифтахетдин Ҡотломөхәммәт улы 1857 йылда донъяға килеп, 1931 йылда баҡыйлыҡҡа күсә. Уның тураһында хәтирәләрҙе мин бары ауылда ишеткәндәрҙән, әсәйемдең һәм олатайым Файзрахмандың минә һөйләгәндәренән сығып ҡына ҡабатлай алам.

Иртә балалыҡ осоро башҡаларҙыҡынан айырылмаған. Биш-алты йәштәр тирәһендә урамда ғына йөрөгән еренән аҙна самаһына юғалып тора. Аҙаҡ ауыл осонда пәйҙә булып, өйҙәренә ҡайтып инә. "Ҡайҙа булдың?" тип һорауҙарына ул "Күмәк малайҙар, ҡыҙҙар уйнап йөрөгән ҙур йорт эсенә алып керҙеләр. Ике кис йоҡлағас, ҡабаттан ауыл осона килтереп ҡалдырҙылар", тиеүҙән башҡаны һөйләй алмай. Бынан һуң ул алмаштырылған кеүек белемгә, уҡыуға тартыла башлай. Тиҙ арала уҡый, яҙырға өйрәнеп, иҙән уртаһында үҙ алдына лыбырлап китап уҡып ултырырға әүәҫләнеп китә. Шуға ла уға үҫмер сағында "Ен алыштырған Мостаҡ" тигән ҡушамат та тағалар.

Халыҡ хәтерендә һаҡланыуынса, 1850-1870 йылдарҙа 5-10 йәшлек малай, ҡыҙҙарҙың юғалып тороу осраҡтары йыш була. Ҡолғона ауылында йәшәгән Ғарифуллин Сөләймән ағайҙың атаһы ла малай сағында ғәйеп була. Ике-өс көн үткәс, "Икенсе бәлә тауы" тирәһендәге "Ен соҡоро" тип йөрөтөлгән уя буйында илап ултырған еренән барып алалар. Аҙаҡ үҙенең һөйләүенсә, уны ла күмәк балалар уйнап йөрөгән өйгә алып инәләр. Әммә ул унда уларҙың береһе менән дә аралашмай, бер мөйөштә ҡысҡырып илап тик тора. Шуға ла уны "Был малайҙан булмай!" тип сығарып ебәрәләр. Атайымдың атаһы Имаметдин олатай ҙа шундай "балалар баҡсаһына" барып әләгә. Әммә ул шул йәшендә үк "һуғыш суҡмары" була. Бөтәһен дә баҫтырып йөрөп туҡмай. Башҡаларҙы имгәтеп бөтмәҫ элек, үҙенән ҡотолайыҡ, тип, сығарып ебәрәләр.

Бөгөнгө көндә "Йәнәш донъялар" (Параллельные миры), "Башҡа планеталарҙа йәшәүселәр" (инопланетяне) тигән төшөнсәләргә күптәребеҙ аптырамайбыҙ, хатта күнегеп тә барабыҙ. Тимәк, ниндәйҙер ныҡ үҫешкән ғәләм вәкилдәре шул замандарҙа беҙҙең ерҙәге әҙәми заттарҙы тәрбиәгә алып, рухи һәм фәнни үҫешкә йүнәлеш, ынтылыш көсөн һеңдергән. Быға ғәжәпләнергә түгел. Шул 1800 йылдарҙан бөгөнгө көнгәсә (200 йыл араһында) Ер йөҙөндәге тормош фәнни үҫештәр арҡаһында нисек үҙгәрә! Ә уға тиклем йөҙәр, меңәр йылдар дауамында рухи үҫеш тә, фән дә бер урында тигәндәй тапанған...

### Мулла ғына түгел, табип та

Мифтахетдиндың уҡыуға ынтылышы, зирәклеге тирә-яҡҡа тиҙ тарала. Әммә бәхет менән бәхетһеҙлек йәнәш йөрөй. Көтмәгәндә уның атаһы ла, әсәһе лә бер-бер артлы үлеп, тома етем ҡала. Заманында данлыҡлы Һайран мәҙрәсәһенең абыҙы Рафиҡ мулла Мифтахетдинды үҙенә малайлыҡҡа ала. Эшсән, тырыш һәм физик яҡтан да көслө Мифтахетдин Рафиҡ муллала хеҙмәтсе һымағыраҡ булһа ла, тулы (10 йыллыҡ) мәҙрәсә белемен өлгәшеп, муллалыҡ танытмаһы ала. Рафиҡ мулла үҙе лә бик белемле, мәғрифәтле руханиҙарҙан һаналған. Зәйнулла Рәсүлев менән дә яҡындан таныш һәм арҡаҙаштар булғанлығы билдәле. Тимәк, Мифтахетдин да Ислам диненең суфыйсылыҡ тармағы, йәғни тәғлимәте менән таныш булып, шул ағымда рухын үҫтереүе бик мөмкин.

Алда әйтеп үтеүемсә, Мифтахетдин Кинйәбулатҡа ҡайтҡас, Кесебейә урманынан бүрәнәләр күтәреп ташып, йорт бурап инә. Өйләнеп, мал-тыуарлы булып, балалар үҫтереп донъя көтә башлай. Тирә-яҡтағы мәсеттәр, мәҙрәсәләр һәм муллалар менән яҡын бәйләнештә була. Дуҫтары уға килгән саҡтарында һәр ваҡыт берәй яңы китап биреп китә. Үҙе иһә, ҡайҙа барһа ла, кәрәкле китаптарҙы эҙләп һатып алып йөрөй. Хатта Ҡаҙандан, Ырымбурҙан, Силәбенән, Петербургтан китаптар килтерткәнлеге билдәле. Табиплыҡ һәм муллалыҡ даны таралған һайын, килеме лә артып, арыу ғына бай кешегә әйләнә. Тейешенсә эш хаҡы түләп, бер нисә хеҙмәтсе лә тота. Мифтахетдин олатайҙың төп килеме муллалыҡ эшен башҡарғандан булмағандыр. Сөнки ул ауылдағы ике мәсеттең береһендә лә төп урын биләүсе дин әһеле булмаған. Әммә ике мәсеттең дә эшен күҙәтеүсе, төҙәтеүсе вазифаһын башҡарған. Тимәк, уның рухи көсө, белеме һәм һөләте башҡаларҙыҡынан юғары булған, тип һығымта яһарға мөмкиндер. Уның килеменең төп өлөшө ауырыуҙарҙы дауалауҙан, күрше ауылдарҙа һәм хәллерәк мосолмандарҙың үтенестәре буйынса дини йолалар башҡарыуҙан тупланған. Файзрахман олатайымдың һәм әсәйемдең хәтирәләре һәм һөйләүҙәре буйынса, уға юғалған малдарының ҡайҙалығын белешергә тирә-яҡ ауылдарҙан да килгәндәр. Ул әйтеп, өйрәтеп ебәргәс буйынса табылған һыйырҙар өсөн- бер нисә һарыҡ, аттар өсөн таналар килтереп ҡалдырып китеү ғәҙәти хәл булған. Ҡайһы ваҡыт уның һарайына көнөнә генә лә утыҙар баш мал ингән.

Әммә килгән малдарҙың береһе лә өс көндән артыҡ һарайҙа тормаған. Һарыҡ-таналар һуйылып, ас-яланғастарға, етем-еҫерҙәргә өләшләп таратылған, һатылған тай-аттарҙың аҡсаһы тейешенсә хәйер-саҙаҡаға тотонолған. Ҡайһы саҡта йорттағылар, килгән тана-тайҙарҙың тоҡомо яҡшы, тип, уларҙы үҙҙәрендә ҡалдырыуға рөхсәтен һорағандар. Әммә һәр ваҡыт: "Ярамай! Беҙгә харам",- тигән яуап булған. Ҡалдырған хәлдә лә, урынына үҙенең һарайындағы малды тотонорға ҡушҡан.

### Дауалау алымдары

Мифтахетдин мулланың күпселек матди килеме ауырыуҙарҙы дауалауҙан булған, тип әйтергә була. Әммә ул бөтә төр ауырыуҙарҙы ла дауалауға тотонмаған. Әйтәйек, сире хирургияға ҡағылышлы ауырыуҙарға дипломлы табиптарға барырға кәңәш иткән. Алда әйтеп үтеүемсә, дарыуҙарҙы ул төрлө үлән сәскәләренән, һабаҡ һәм тамырҙарынан әҙерләгән. Яҙҙан көҙгәсә урман-яландарҙа үҙе йөрөп йыйған дарыу үләндәрен ҡайнатҡанда, йә төнәтмәләр әҙерләгәндә уға килене Ғәрифә ярҙам иткән. Ғәрифә өләсәйемдең әсәйемә һөйләп ҡалдырған бер рецебын - ашҡаҙандың сей яраһы (язва желудка) сирен нисек дауалағанын яҙып үтеү кәрәктер тип уйлайым. Стәрле баҙарында ит һатыу менән кәсеп иткән ирҙе алып киләләр. Ул ашҡаҙаны ауыртыуҙан, ашағанын ҡан ҡатыш ҡоҫоуҙан ныҡ ябыҡҡан, хәлһеҙләнеп, һуңғы сиккә еткән була. Төрлө үлән дарыуҙарын да ҡулланып, ирҙе буҙа менән дауалай. (Алынған әйберҙәрҙең күләмен өләсәй үҙе тотонған ярты литр самаһы һыйҙышлы сүместә күрһәткән). Ете сүмес таҙа, өлгөргән һолоно 40 сүмес шишмә һыуында бик оҙаҡ ҡайнатҡан. Һыуы ҡайнап бөтә яҙып (ете сүместәй генә һыуы ҡалғанда), сүмес менән һоҫоп алғанда ул ҡуйырған ҡорт балылай һүҙылып торған. Уның өҫтөнә ҡабаттан ҡайнап сыҡҡан 40 сүмес һыу өҫтәп, буҙа итеп әсеткәндәр. Әсеткәндә инде кәрәгенсә шәкәр, һары май һәм мөгөҙлө малдарҙың эс майын өҫтәгәндәр. Шулай итеп, әҙерләнгән буҙаны ауырыуға ашар алдынан берәр кәсә (стакан) эсергән. Айҙан ашыу дауалағандан һуң теге ир һауығып, үҙ аяғында ҡайтып киткән. Аҙаҡ Фәйзрахман олатайыма Стәрле баҙарына барырға тура килгән саҡтарҙа, теге ит һатыусы күреп ҡалһа, ай-вайына ҡуймай, атайыңа алып ҡайт, тип, ярты арба ит һәм башҡа тәм-томдар тейәп ҡайтарыр булған. Элекке кешеләр һаулыҡ ҡәҙерен генә түгел, табип ҡәҙерен дә дөрөҫ баһалағандар. Сөнки ин ҙур байлыҡ - һаулыҡ.

Икенсе бер ваҡиға: Стәрлелә медицина профессоры дәрәжәһенә етеп эшләп йөрөгән табип үҙенең 18-20 йәштәрҙәге быума өйәнәге менән яфаланған ҡыҙын алып килә. Ҡыҙыҡайҙы үҙҙәрендә өс ай самаһы дауалап, быума өйәнәктәрен туктата. Ҡыҙын алып ҡайтырға килгән профессор менән Мифтахетдин быума сире тураһында бик оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултыра. Профессор үҙенең китаптарын, ә Мифтахетдин олатай үҙенең "Тиб" китаптарын алдарына һалып, ауырыуҙарҙы дауалау ысулдарын сағыштырып, фекер уртаҡлаша. Өҫтөнлөк һис шикһеҙ Мифтахетдин яғында булғандыр. Беҙ, бөгөнгө табиптар, әле һаман быума сирен тулыһынса дауалай алмайбыҙ. Сөнки беҙ ул ауырыуға һаман да тик бер яҡтан ҡарайбыҙ. Дарыуҙар көсөн генә ҡулланабыҙ. Ә Мифтахетдин олатай төрлө үләндәрҙән әҙерләнгән дарыуҙар, гипноз һәм һүҙ көсөн ҡулланып дауалаған. Бөгөнгө көндә үҙем пенсия йәшенә еткән табип булараҡ, шуны әйтер инем: беҙгә кәрәкмәгән фәнни коммунизм, атеизм, политэкономия һәм башҡа шундай фәндәр уҡытҡансы, төплөрәк итеп дарыу үләндәре һәм боронғо медицина серҙәре тураһында белем бирһәләр, күпкә файҙалыраҡ булыр ине.

### Рухи сирҙәрҙе лә дауалаған әүлиә

Бөгөнгө көндә наркологтар эскелектән бары бер-ике йылға код ҡуялар. Ҡайһы берҙәренең файҙаһы тейә. Күпселектә эскеселәр эштән ҡыуылмаҫ өсөн генә наркологҡа барып, аҡса түләп, справка алып ҡайталар ҙа, 3-4 ай түҙеп эсмәй йөрөйҙәр. Бер ҡатын Бөрйән районы Ямаш ауылында йәшәгән әүлиә Уйылдан муллаға эсеп яфалаған ирен өшкөртөргә ебәрә. Муллаға тапшырырға тип ике ҡаҙ да бирә. "Уға ике ҡаҙ бик майлы булыр", тип, теге ир ҡаҙҙың береһен ауылға етмәҫ борон йәшереп китә. Әлеге мулла өшкөрөп биргән бер семтем тоҙҙо эскәндән һуң, ҡаҙҙы тапшырып, сығыу яғына ыңғайлай был. Уйылдан мулла уға: "Ағас ҡыуышына йәшереп киткән ҡаҙыңды онотоп ҡуйма. Эргәһендә эттәр йөрөй", - ти икән. Өйөнә ҡайтҡас, был ир үҙендә бер ниндәй ҙә үҙгәреш һиҙмәй. Эсеп алғыһы килә башлай. Йәшереп ҡуйған араҡыһынан ярты стакан һалып алып, йоторға самалай. Ни ғәжәп? Стаканды ауыҙына килтереү менән араҡы еҫенән уҡшый башлай. Шулай ҙа ныҡышып эсә һәм ҡоҫоп ебәрә. Икенсе көнөнә лә, аҙнанан, айҙан һуң да шул уҡ хәл ҡабатлана. Шулай итеп, эскесе ауыҙы янында торған араҡыны эсә алмай, айыҡ кешеләр рәтенә баҫа. Бына был ысын мәғәнәһендә "кодировать" итеү була.

Гипноз көсөн Мифтахетдин олатай бер ваҡытта ла кешеләргә кирәмәт күрһәтеү өсөн ҡулланмаған, ә дауалауҙың бер ысулы итеп файҙаланған. Әйтәйек, ауырыуҙың үҙенә был турала әйтмәй генә ауыртыу-һыҙланыуҙарын баҫыу, йәшәү рәүешен һәм ҡылыҡтарын үҙгәртеү өсөн гипноз алымын ҡулланған. Алда әйтеп үтеүемсә, ул үҙенең бесәнен урлаған егеттәрҙе ашатып-эсереп ултырғанда урлашыу ҡылыҡтарынан код ҡуя алған. Ғәрифә өләсәйемә лә уның гипноз ҡулланғанын бер тапҡыр күрергә тура килгән. Мифтахетдин олатай урындыҡта намаҙ ҡылып ултырған, ә килене Ғәрифә өй иҙәнен йыуып бөтөп, солан иҙәнен йыуа башлаған була. Күршелә йәшәгән бик тыйнаҡһыҙ малай, "Аяғыңды йыуып, еүеш сепрәк менән һөртөп ин!" тиеүгә ҡарамай, ямғырҙан һуң бысранған яланғас аяҡтары менән өйгә инеп китә. Инеп тә китә, илай-илай шарылдап, әләгә-тәгәрәй йүгереп килеп тә сыға был. "Ни булды?" тигәнгә: "Бабай минә ҡарағайны, урындығы аҫтынан йыландары килеп сығып, ысылдашып минә ташландылар", - ти икән.

Эйе, алдашыу, һүгенеү, урлашыу, тәртипһеҙлек һәм енәйәт ҡылыуға әүәҫлектәр - былар бөтәһе лә үҙ ваҡытында дауаланмаған һәм киҫәтелмәгән рухи ауырыуҙар. Быларҙы, минеңсә, фәҡәт һүҙ көсө, гипноз, йәғни әүлиәлек ҡөҙрәте менән генә дауалап була. Балаларға, үҫмерҙәргә иң көслө тәрбиәүи әүлиәләр - уларҙың ата-әсәләре, ә иң көслө гипнотизерҙары - улар йәшәгән донъя, йәғни күргәндәре. Үҙҙәре тәрбиәле, тәртипле ата-әсәләр һәм зауыҡ донъя ғына сәләмәт йәмғиәттең нигеҙе!

**Рәдис ДУСАЛИН,
Ишембай районы Маҡар ауылы участка дауаханаһы табибы, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, һәүәҫкәр тарихсы, шағир.**

**(Дауамы. Башы 12-се һанда).**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО







## Имеҙеп тор...

Был хәл Әбйәлил районы ауылдарының береһендә 60 йылдар элек булған. Ул ваҡытта ауыл халҡы, шул иҫәптән йәш балалары булған ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, Белорет районына - Ҡағыға - йөрөп эшләгән. Ауылдың бер урамында, күрше генә йәшәгән ике йортта 2-4 йәштәр тирәһендәге балалар үҫеп килгән була. Бер көндө иртән Хәҙисәләргә күрше малай Шәриф йүгереп ингән дә: "Еңгә, һин мине бөгөн имеҙеп тор инде, әсәйем мине уятып тормай, Ҡағыға эшкә киткән дә барған", - тип хәбәр һалған. Был отҡор Шәриф исемле малай күптән үҙе олатай, ләкин ауылдаштары әле булһа ошо ҡыҙыҡты һөйләп, көләп ала.

## Ата ҡаҙҙың бер бисәһе...

Элегерәк ауылдың һәр йортонда кәмендә берәр пар ҡаҙ, өйрәк көтөлдө. Шулай уҡ бер ата ҡаҙҙың ике инәһе булыуы ла йыш күренеш булды. Уларҙың яҙын йомортҡа һалып, йәйгә себештәр баҫып сығарыуы бала-саға өсөн ҙур ваҡиғаға әйләнә ине. Ҡаҙҙарҙы һәр ваҡыт иғтибар менән күҙәтеп йөрөгән һеңлем бер көндө хәле бөтөп өйгә йүгереп инде лә: "Әсәй, ата ҡаҙҙың бер бисәһе ҡайтмаған!" - тип һөрән һалды. Ата ҡаҙҙы "өйләндереп" ҡуйған ҡыҙыҡай хәҙер Өфөлә журналист булып эшләй.

## Көтөп ала алмаған...

Бер көндө ихатала эш менән булып йөрөгән Миңһылыу апай менән Әхәт ағай 3 йәшлек улдары Вадимдың көр тауышын ишетеп, һиҫкәнеп китә. Бактиһәң, өйҙә йоҡлап ятҡан Вадим уянып, янына кем дә булһа килеүен оҙаҡ ҡына көтөп ята ла, көтөп ала алмағас, тышҡа сығып: "Уянып ҡарап ятҡаныма ҡасан, эргәмдә береһе юҡ! Әллә рәхәт тип уйлайһығыҙмы шулай ятыуы, үҙегеҙ ятып ҡарағыҙ, вот!" - тип ҡысҡырып илай икән.

## Апаһы илатҡан

Фәрүәзгә 6 йәш. Апаһы менән урамда уйнап йөрөйҙәр. Бер заман ул ҡысҡырып: "Әсәй, ана, апайым мине илатырға ғына әҙерләнеп тора! Ана, уже илата инде! Уже илатты инде, а-а-а..." - тип илап та ебәргән, ти.

## Һинән имәк һорамайҙар

Өс йәшлек Зилә имеп ултыра икән. Килеп ингән ағаһы: "Был башмағығыҙ һаман да имә икән", - тигәс, Зилә уға: "Имһен! Имһә, һинән әмәк һорамайҙар. Унда һинең эшең булмаһын!" - тип яуап биргән дә, имеүен дауам иткән. Әсе телле был ҡыҙыҡай бөгөнгө көндә Өфө мәктәптәренең береһендә балаларға белем бирә.

## Ирем юғалды...

Был хәл 30-35 йылдар элек Әбйәлил районы Ҡаҙмаш ауылында булған. Күрше ауылдан төшкән йәш килен бик шаян булып сыға. Берҙәнбер көндө иртән күрше-тирәлә йәшәүселәр үҙҙәренең өй ҡапҡаһында дәфтәр битенә яҙып эленгән белдереү күрә. Унда: "Иғтибар! Ирем юғалды. Кисә сығып киткәндән алып ҡайтманы. Билдәләре: өҫтөнә иҫке генә фуфайка, башына бер ҡолағы төшөп торған кәпәсен ҡырын һалып кейгән, быймаһы ҙур, остары күтәрелеп тора. Иненә "Дружба" бысҡыһы аҫҡан. Күреүселәр булһа, шул номерлы шул йортҡа хәбәр итеүегеҙ һорала. Һөйөнсөһө буласаҡ", - тип яҙылған була. Һөйөнсөнән кем алғандыр, билдәһеҙ, ләкин был ғаилә бөгөн дә матур, татыу итеп ғүмер итә. Ә ул еңгәй әле лә шаян һәм матур.

## Икеһен бер юлы...

Район үҙәге Аҫҡар вокзалында халыҡ автобус көтөп ултыра икән. Бер ваҡыт һин дә мин уйнап йөрөгән 3-4 йәштәрҙәге малай әсәһенән имергә һорай башлай. Уңайһыҙланып киткән йәш әсәй: "Кешеләр ҡарап ултыра бит, ҡайтҡас имерһең, йәме", - тигәс, малай: "Улайһа, икеһен бер юлы имәм, белден!" - тип үҙенең талабын да әйтеп ҡуйған. Был үткер балаға ла бөгөнгө көндә 40 йәштәр самаһы барҙыр.

## Эттәрен дә буяғандар

Йыл һайын республиканың бернисә ауылында шаулап-гөрләп "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамы үтә. Әбйәлил районында ла был сараны көтөп алалар һәм ныҡлы әҙерләнәләр. Бигерәк тә байрамды тәү башлап ойоштороусы Ҡаҙмаш ауылы халҡы дәррәү була. Ошоға бәйле бер ҡыҙыҡ хәл. Ҡунаҡ көткән кеше йорт-ихатаһын тәҙәкләндерә, буяй, яңырта. Ҡапҡаның өҫкө яғын буяп йөрөгән әсәйем менән инәйем эшкә әүрәп, аҫта йөрөгән 5 йәшлек Нураныяға иғтибар итмәгән. Ә ул ошонан файҙаланып, бер һауыт шаҙлы (буяу) алып, ҡап-ҡара этте йәшел төҫкә буяп ҡуйған. Ошо ваҡиғанан һуң "Ҡаҙмаштар осрашыуға шул тиклем ныҡ әҙерләнә, хатта эттәрен дә буяп бөтә", тип көләләр.

## Ғариза яҙған

Бәләкәй Вәсиләнең бесәнгә йөрөгәһө килә, ләкин олатаһы алып бармай икән. Ҡыҙыҡайҙың әсәһе шаяртып, "Бесәнгә алып барыуығыҙҙы һорайым", тип олатаһы исеменә ғариза яҙырға кәңәш бирә. Әмәле табылғанға ҡыуанған Вәсилә эште оҙаҡҡа һуҙмай - ғаризаһын яҙа ла, олатаһына бара. Олатаһы ейәнсәрененң ғаризаһына "Алып барырға", тигән имза һуғып ҡайтарып ебәрә. Икенсе көнөнә бәхетле Вәсилә бөтәһе менән бергә бесәнгә китә. Бесән эшләргә яратҡан ҡыҙ бөгөн үҙе бәхетле өләсәй булып, ейәнсәр тәрбиәләй.




## Төшһәм нисек сығам?

80-се йылдарҙа әле фотоаппарат һәр кемдә лә булмай. Ошоға бәйле ҡыҙыҡ хәлдәр ҙә йыш осрай. 3 йәшлек Рәйлә ата-әсәһе менән ҡунаҡҡа бара. Унда бала-саға гөү килеп фотоға төшә икән. Рәйләгә лә тәкдим итәләр, ләкин ул ҡысҡырып илап ебәрә лә: "Төшмәйем, унда төшһәм, нисек сығам мин?.." - тип баш тарта. Уның ай-вайына ҡуймай, бер аҙ тынысланғас, барыбер ҙә фотоға төшөрәләр. Йылдар үткән, ләкин әле булһа ул фотоға ҡарап, был ваҡиғаны иҫләп алалар.

## Сәй эсергә ин...

Бер ваҡыт әсәһе Фәнүрҙе күршелә йәшәгән Шәүрә апайға сәйгә әйтергә ебәрә. Күршеләргә тиклем атлап барырға йыбанған малай тупһаға сығып баҫа ла, бар тирә-яҡты яңғыратып: "Шалу күрше, сәй эсергә ин!" - тип ҡысҡыра ти.

## Әтәскә рәхәт...

Ошо уҡ малай тупһала тороп, ҡурала йөрөп ятҡан ҡош-ҡортто, малтыуарҙы күҙәтә икән. Бер заман: "Әтәскә рәхәт, "тукта-тукта" ти ҙә, тауыҡҡа атланып китә лә бара",-тип хәбәр һалған.

## Тәм-том әҙләйем

Айгөлгә 4 йәш булғанда, уны инәләре ҡунаҡҡа алып ҡайтҡан. Төн етеп, барыһы ла йоҡлап киткәс, кухня яғында ҡыштыр-ҡыштыр килгән тауыш ишетелә. Тороп ҡарағалар, Айгөл шкафтың ишектәрен асып ҡарап йөрөй ти. Аптырашып, уның нимә эҙләгәнен һорайҙар. "Тәм-том", тип яуап ҡайтара ҡыҙыҡай. Тәм-том яратыусы был ҡыҙыҡай менән Шалуны сәйгә саҡырыусы малай бөгөн ғаилә ҡороп, матур итеп йәшәйҙәр.




## Бәрәсте туңдырған

Ауылда ҡышҡы һыуыҡта бәрәстәрҙең өйҙә тороуы ят күренеш түгел. Быға барыһы ла өйрәнеп бөткән. Ләкин ҡалала үҫкән балаға быны аңлауы ҡыйын. Өфөнән олатай-өләсәһенә ҡунаҡҡа барған Ильяс та был хәлгә аптырап ҡарай. Бер көндө ул, өйҙә бер кемдең дә булмауынан файҙаланып, бәрәстәрҙе, уларға ҡушып бесәйҙе лә, урамға сығарып ебәрә. Инде туңып бөтә яҙған бәрәстәрҙе олатаһының ҡайтып инеүе генә ҡотҡарып ҡала. Ни өсөн улай эшләүен һорағас, Ильяс: "Хайуандар бөтәһе лә тышта йәшәй. Ана, һыйыр ҙа, быҙауҙар ҙа һарайҙа тора, ә бәрәстәр өйҙә. Улай бит не честно!" - тип яуап ҡайтара.

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әҙерләне.**

ЗАУЫҠ

*Риф МИФТАХОВ*

# ХИКМӘТЛЕ ҺҮҘ КҮП БУЛМАЙ

Ваҡыт-толпар: теҙгененде
Ҡыҫҡа тот та - алға тоҫҡа.
Һәр маҡсаттың араһы бар,
Сараһы бар - ғүмер ҡыҫҡа!

* * *

Дуҫ булалмай ҡайһы ваҡыт
Хатта яҡын туғаның.
Беләм, яҡшы дуҫ туғандан
Яҡынraҡ булғанын.

* * *

"Бур!" - тип яу һалдым:
Бакты бар халыҡ.
"Шәп кеше!" тиергә
Баш борған кеше юҡ.

* * *

Хаҡлыҡ өсөн һәләк булған кеше
Уйламағыҙ юҡ тип донъяла.
Ғәҙел хөкөмдәрҙе ер өҫтөнә
"Теге донъя"ларҙан сығара.

* * *

"Мин йөҙөнә бәреп әйтәм!" - тиһең,
Тик сыҡмаһын һинең хәтерҙән:
"Бәреү" - кәсһеҙ, көләп-кинәйәләп,
Аҡыл менән уйлап әйтеүҙән
Һәм ул китмәй оҙаҡ хәтерҙән.

* * *

Һүҙ - ҡош, телеңдән ысҡынһа,
Яныңнан тоталмаҫһың.
Ә һине тотоп ябырҙар.
Һайрарһың - сығалмаҫһың.

* * *

Әҙәм заты ысынбарлыҡтарҙан
Тик һөйләһә хаҡты, дөрөҫтө,
Ғәҙел тормош, һиллек урынлашып,
Тынысланыр ине Ер өҫтө.

* * *

Ваҡыт үтә тиеп уфтанмайыҡ,
Йәшәйек беҙ уға бөгөлмәй.
Ҡартлыҡта ла бар ул оло шатлыҡ -
Һәр кемгә лә ул баш бирелмәй.

* * *

Бай дуҫым бар, тиеп һауаланма,
Һәм ышанма булмаҫ хикмәткә.
Бай дуҫтарға оло бүләк кәрәк,
Ундай дуҫтар төшә ҡимmәткә.

* * *

Үргә үрләп, дан-шөһрәттән башың
Әйләнгәндә... тукта, эй бәндә,
Тупраҡҡа баҫ - тамырҙарың ерҙә -
Халыҡ менән бергә - түбәндә! -
Ул ҡотҡарыр һине һәр мәлдә.

* * *

Дауыл йолҡа ҙур ағасты,
Йыҡмай юҡ-бар ҡыуаҡтарҙы...
Ауҙарһалар юғарынан -
Рух һынмаһа - һин юғары!

* * *

Түргә менһә, түрәләрҙе
Беҙ яһайбыҙ "йөҙәк ҡашы".
Осорһалар, бактиһәң, ул
Сатнап бөткән "мунса ташы".

* * *

Ҡас алыҫҡа: ваҡ йәнлеләр
Көнләшеүсән - бәхәс ҡуба.
Бар янына: ҙур күңелдәр
Эргәһендә шәхес тыуа.

* * *

Аҡыл һатып, һүҙгә оҫталығын
Ике сәғәт һуҙғас бер әҙәм,
Яҙып ҡуйҙым: баҫалҡылыҡ - байлыҡ,
Тыңлай белеү - өҫтөн һөйләүҙән.

* * *

Һай һыуҙар - болғансыҡ,
Һай аҡыл - маҡтансыҡ.
Урап үт: батырыр
Һаҙлыҡ һәм буш ҡапсыҡ.

**(Дауамы бар).**

✔ Һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың дүрттән бер өлөшө, йәғни бөтөнләй ит ашамаусылар, интеллектуаль һәләттәрен юғалтҡан. Ә итте һәм балыҡты йыш ашаусылар хатта ҡартайыу менән бәйле ауырыуҙарға ла бирешеп бармай икән.



ИНТЕРНЕТТАН



# ИТ АШАУСЫ ИР-ЕГЕТ... ҡартаймай

■ Өлкән йәштәге ир-егеттәргә ит һәм балыҡ нигеҙендә төҙөлгән диета файҙалы. Япон ғалимдары ете йыл үткәргән һынауҙарҙа 1 меңдән ашыу өлкән йәштәге ир-ат ҡатнаша. Ит һәм балыҡ яратыусыларҙа хайуан аҡһымын бөтөнләй ҡулланмаусыларға ҡарағанда психик һәм физик функциялар түбәнәйеү хәүефе 39 процентҡа ҡыҫҡарған. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың сәләмәтлеге, шулай уҡ тормоштарының социаль һәм интеллектуаль аспекты ике тапҡыр - һынауҙар башында һәм ете йылдан һуң теркәлгән. Балыҡ һәм итте күпме ашауҙарынан сығып, дүрт төркөм билдәләнгән. Һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың дүрттән бер өлөшө, йәғни бөтөнләй ит ашамаусылар, интеллектуаль һәләттәрен юғалтҡан. Ә итте һәм балыҡты йыш ашаусылар хатта ҡартайыу менән бәйле ауырыуҙарға ла бирешеп бармай икән.

■ Финляндия ғалимдары раҫлауынса, дөрөҫ туҡланыу депрессиянан һаҡлай. Депрессия хәлендәге пациенттар туҡланыуға артыҡ иғтибар бирмәй, улар хатта йыш ҡына туйғансы ашамай ҙа. Ғалимдар иҫәпләүенсә, рационда йәшелсәләр, емеш-еләктәр, тауыҡ ите, балыҡ, майһыҙландырылған сыр булырға тейеш, шул саҡта депрессия көйөк заман сире кешене урап үтәсәк. Шулай уҡ билдәле булыуынса, фолий кислотаһы һәм кәһүә депрессияға ҡаршы көрәшә. Әммә ҡайһы бер продукттар депрессияға килтереүе ихтимал, был исемлеккә колбаса, сосиска һәм эшкәртелгән иттең башҡа төрҙәре, тәм-том, татлы һыуҙар, фри картуфы инә.

■ Зәғферән төҫө баш мейеһен тиҙ уятыу һәләтенә эйә. Был турала Бельгия ғалимдары белдерә. Льеж университеты ғалимдары үткәргән һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙы ике төркөмгә бүлгәндәр. Уларҙың барыһы ла МРТ-сканер эсендә хәтерҙе тикшереүсе тест үткән. Беренсе төркөмдәгеләргә тест һорауҙарын яңғыратыр алдынан 10 минут буйы - зәғферән, ә икенсе төркөмгә күк төҫөндәге ут яндырғандар. Һорауҙарға яуап биргәндән һуң улар 70 минут ҡараңғыла, 10 минут күк ут аҫтында ятҡан һәм тағы ла һорауҙарға яуап биргән. Зәғферән төҫө тәьҫиренә бирелгәндәр күк ут аҫтында ятыусыларға ҡарағанда яҡшыраҡ һөҙөмтә күрһәткән. Зәғферән төҫөн ҡабыҙғандан һуң баш мейеһенең иғтибар һәм күҙәтеүсәнлек өсөн яуап биреүсе өлөштәрендә әүҙемлек күҙәтелгән. Доктор Вандерволле әйтеүенсә, зәғферән төҫө меланопсиндың яҡтыға тәьҫир итеүсе формаһын, ә ул үҙ сиратында баш мейеһен "уята".

■ Һалҡын тейгәндә халыҡ дауаһына өҫтөнлөк биреүселәр әйтеүенсә, эхинацея үҫемлеге экстракты һауығырға ярҙам итә. Мэдисондағы Висконсин университеты (АҠШ) ғалимдары эхинацея нигеҙендәге дарыуҙарҙы тикшергән һәм уларҙың һалҡын тейеүҙән дауалай алмауын асыҡлаған. Шулай ҙа эхинацея препараттарының ауырыуҙы профилактикалауҙа файҙаһы бар. Белгестәр раҫлауынса, был препараттарҙың күбеһе тикшереү үтмәй һәм азыҡҡа биологик өҫтәмә булып тора. Әйткәндәй, киҫкен вирусы ауырыуҙар менән яфаланыусылар дарыуға, шул иҫәптән, эхинацея өҫтәмәләренә йылына уртаса 8 млрд. доллар исраф итә.

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО







## "Әкрен, кейәү, ҡыҙым йәш!"

Ауылыбыҙҙа Миңләхмәт исемле йор һүҙле, кеше көлдөрөп һөйләшкән бабай (һуғыш ветераны, 1910 йылғы ине) була торғайны. Хәләл ефете менән өс ҡыҙ, биш ул үҫтерҙеләр. Бер ҡыҙын, халыҡ әйтмешләй, "кәртҡә отторған", имеш. Отторған, тигәс тә, уйынлы-ысынлы, шаярып һөйләшкәндәр инде. Яусылар артынса уҡ, эҙенә баҫып, килеп тә еткән кейәү егете. Әммә ул егет һората торған ҡыҙы өйҙә булмағас, уға икенсе ҡыҙын бирергә булған Миңләхмәт бабай. Никах уҡылғас, еңгәләре ҡыҙ менән егетте сымылдыҡҡа алып китер алдынан, бабайыбыҙ: "Әкрен, кейәү, ҡыҙым йәш!" - тип әйткән тиҙәр. Һаман да беҙҙең ауылда яуаплы һәм мөһим эшкә тотонор алдынан ошо һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрәләр.

## "Теге донъяламын икән, тиһәм..."

Һуғыш ғәрәсәтен үткән быуын вәкиле булараҡ, бабай һалырға ла ярата ине. Эсеп алғас, теленән ҡолаҡҡа ятмаған һүҙҙәр ҙә ысҡынып киткеләгән. Ҡайһылыр ҡыҙының туйында, иҫереп киткәс, юҡты һөйләп йөрөмәһен, типтер инде, Миңләхмәт бабайҙы һике аҫтына һалып ҡуйғандар, ти. Айныйбашлағас, бабайыбыҙ тирә-яғын һәрмәп, ҡапшап ҡарай ҙа: "Әлләкәберҙә ятам инде, быныһы, ахыры, ләхет таҡтаһы?" - тип уйлай икән. Бына бер саҡ ҡайҙандыр йыраҡтан таныш тауыш ишетелгән: "Бәй, Фатимамдың тауышы шай ҙа? - тип һөйләнә-һөйләнә һике аҫтынан шыуышып сығып килә икән бабай. - Ә мин теге донъяла ятам, тип уйлаған булам тағы..."

## Дипломһыҙ...

Заманында Абрал ағай Ғарипов шаян һүҙе, оҙон көйлө йырҙары менән ауылдаштарҙы хайран иткән кеше булды. Беҙ бәләкәй саҡта уның белгәс, һәр уйынлы-ысынлы һүҙен йотоп йөрөр инек. Бер йылды бесән ваҡытында ағайыбыҙ звеноһында эшләнек. Олпат көүҙәле, бер кутәргәндә ярты күбәнде күтәрә лә ҡуя ине шикелле. Ат һөйрәткеһенә ҡыралағы бесәнде лә тейәй, ат менән дә идара итә. Атты ҡуҙғатҡанда, уны шулай тип ҡыуалай: "Дипломһыҙ, тешең һиҙҙағыры!" Беҙгә, ҡыҙ-ҡыркынға, шул ғына кәрәк. Тәгәрәп ятып көлгән булабыҙ. Ғөмүмән, Абрал ағай бер ваҡытта ла түбән йөкмәткеле "ҡыҙыҡ" һөйләмәне, шаян һүҙе менән бар кешене йәлеп итерлек, тәрбиә бирерлек юмор эйәһе булды.

## "Белһә, Ильяс беләләр!"

Элек башланғыс синыфтарҙы бер уҡытыусы уҡыта ине. Икенсе йылға ултырып ҡалған Мөхәммәт исемле ауылдаш малай ҡабаттан беренсегә уҡырға килгән. Уҡытыусыбыҙ Тәнзилә апай Ленин бабайҙың портретына күрһәткән дә, һорай икән:

- Уҡыусылар, әйтегеҙ әле, был кем?

Мөхәммәт талпынып тороп ҡул күтәргәс, уҡытыусы, шатланып, унаң һорарға булған:

- Йә әйт әле, кем инде был?

Мөхәммәт баҫҡан да, етди төҫ менән һәм ышанyслы итеп:

- Белһә, Ильяс беләләр, - тигән һәм, башлы малай яғына ҡарап, әйәген ҡаҡҡан.

Шунан бирле беҙҙең ауылда берәр аптырауҙы һорауға яуап таба алмаһалар, "белһә, Ильяс беләләр", тиҙәр.

## Асығып киткәнһеңдер...

Күрше мишәр ауылында ауылсы һәм телдәр бер ҡатын булған. Бер ваҡыт шулай һыуға тип кенә сыҡҡан да, урамда ләстит һатып тора икән. Тутәйҙең хәләл ефете, хәбәр тоҡсайының ҡылыҡтарын нисек белһә ла йүгәнләр өсөн, үҫмер улын саҡырып алған да, бер телем икмәк биргән һәм: "Бар, улым, әнкәйенә шул икмәкте генә тоттор әле",- тигән.

Татылдаҡ тутәй, иңдәрендә ятҡан көйәнтәһенең баҫып барғанына ла иғтибар итмәй, һаман хәбәр сутырлатыр ине лә, улы йүгереп килеп:

- Әнкәй, мә сиңа ипи, асығып киткәнсеңдер, - тигән.

Әсәһенә йүгерә-атлай өйөнә ынғайларға ғына ҡалған.

## Аңлатып торорһоң

Атайым Фәйзрахман Фәссәхетдинов механизаторҙарҙың белемдәрен камиллаштырыу уҡыуҙары ойоштора торғайны. Тракторҙың төҙөләшөн схемалар ярҙамында аңлатып һөйләп төшкән фотоһүрәттәре лә бар, ғаилә альбомыбыҙҙа ҡәҙерләп һаҡлана. Атайымдың ауыл хужалығы техникаһы тураһында теоретик белеме һәйбәт булған, ә техниканы ғәмәлдә биш бармағы кеүек белеп етмәгәндер, тип әйтмәксе булам. Эшенә артыҡ бирелеп, намыҫлы хеҙмәтен хөрмәт итеп тә, техниканы үҙ ҡулы менән тулыһынса төҙәтеп ала алмауына ла тәрттөрөп микән (сөнки мотоциклын трактористарҙан йүнәттерә ине), механизаторҙар атайым тураһында мәрәкәләп шулай һөйләйҙәр ине.

...Сираттағы ремонт алдынан мотоциклын һүтеп, ҡайһы бер запчастәрен таҙартып, тәркөмләп һала икән. Шул ваҡытта, йәнәһе, ул инәйемде эргәһенә баҫтыра икән дә:

- Ҡарап тор әле, ҡарсыҡ, иғтибар менән: бына был деталде бында һалдым, теге шөрөп ары ята, анау болт арыраҡ, свечалар бында ғына. Иҫеңдә нык тот, кире йыя башлаһаҡ, ҡайһыһын ҡайҙа ҡуйырға аңлатып торорһоң , - тип әйтә була.

Һәм инәйем, йәнәһе, ремонтсы килһә, төбөнә-төмәненә төшөп, барыһын да белеп, ҡыҫылып, күрһәтмәләр генә биреп тора, имеш.

## Флүрҙең плащы, Шаһиҙың ботинкалары...

1957 йылда атайымдың бер туған һеңлеһе Сәүиә апайым, иң кинйәләре, кейәүгә сыға. Туйға барыр өсөн күрше Флүр ағайҙан - плащ, ә бер туған энеһе Шаһиәхмәт ағайымдан ботинкалар алып тора. Бер аҙ бал эсеп, ҡыҙмаса булып алғас, атайым инәйемә:

- Сафия, Флүрҙең плащы менән Шаһиҙың ботинкаларын ҡайҙа ҡуйҙың? Ныҡ ҡара инде, ҡарсыҡ, - тип ҡунаҡтар ишетерлек итеп әйтеп һалмаһынмы...

**Миңһылыу АБДУЛЛИНА.**
**Салауат районы.**

ҠЫҘЫҠ ХӘЛДӘР

# КҮРШЕ ИНӘЙ МЕНӘН ТАНЫШТЫҠ...

**Бала саҡтан әңгәмәселәремдең "дөрөҫ" һөйләүен талап итергә яратҡанмын. Телмәремдә беҙҙең өсөн ятыраҡ һүҙҙәр ҡулланып һөйләгән Хөснә өләсәйемде лә төҙәтер булғанмын. Ул минең, 4-5 йәшлек баланың, шелтәһен ҡабул итеп, "хата"ларын төҙәтергә ашыҡҡан һәм минең арттан "дөрөҫ" һүҙҙәрҙе ҡабатлаған. Мәҫәлән: "бүкән" түгел, ә дөрөҫө "ултырғыс" була, "күнәк" - биҙрә, "ҡымырҡа" - ҡырмыҫҡа, "әһе" - әҫе һәм башҡалар. Был ата-әсәйемдең минең үҙемдең телмәремә ҡарата талапсанлығынан килгәндер, моғайын. Быны мин хәҙер генә аңлағандай булам. Бөгөнгө көндә мин туған телемдә иркен аралашам икән, бында ата-әсәйемдең, уҡытыусыларымдың һәм туғандарымдың өлөшө ҙур икәнлеген дә аңлауы ҡыйын түгел. Рәхмәт уларға. Ҙурая килә, тормош үҙенекен өйрәтте - әңгәмәсене бүлдермәҫкә, уны төҙәтмәҫкә күнектерҙе. Ят һүҙҙәрҙе, һүгенеүҙәрҙе ишетһәм, уларҙы шым ғына отоп ала башланым. Һуңғыларының әрмелә кәрәге тейҙе.**

Әрмегә тиклем БДУ-ның Сибай институтында Педагогика факультетының Башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлегендә уҡыным. Нисәнсе курстан һуң

✓ *Аудиторияның ышанысын яулауҙың ике ысулы бар. Беренсенән, һөйләгән хәбәргә үҙегеҙ ышанырға тейеш. Икенсенән, әйткән һүҙҙәрегеҙҙе тормошҡа ашырығыҙ. Ғәмәлгә ашҡан инаныуҙан да көслөрәк ышаныс тыуҙырған бер нәмә лә юҡ.*



*ТОРМОШ ҺАБАҠТАРЫ*

# УНЫ АМНИСТИЯ ТҮГЕЛ...

## мөғжизә ҡотҡарҙы

**Мәғлүм булыуынса, РФ Дәүләт Думаһы Рәсәй Федерацияһы Конституцияһын ҡабул итеүгә 20 йыл тулыу айҡанлы амнистия иғлан итеү тураһында ҡарар ҡабул иткәйне. Был актҡа ярашлы, күптәр иреккә сығарылды, ә бәғзеләр хөкөм эскәмйәһенән үк азат ителде. Аймылышҡан бәндәләр яҙмышына төшкән был бүләкте дөрөҫ ҡабул итерме? Әллә, киреһенсә, "еңел ҡотолдоҡ" тип, тағы ла нығыраҡ шашыр, сираттағы енәйәтенә тотола алмаҫлыҡ итеп әҙерләнеп барырмы?..**



Был ҡатын, әлбиттә, амнистияға эләгеп, биш йылға иректән мәхрүм ителеү язаһынан ҡотолоп ҡалыуына шат булғандыр. Әммә уның көнитмеше тураһында хәбәрҙар кешеләр был хаҡта ишетеү менән аптырап ҡалды. Уның ун һәм дүрт йәшлек балаһын йыш ҡына өйҙә бикләп ҡалдырыуын, иҫереп ҡайтып, уларҙы туҡмауын күрше-тирә бик яҡшы белә ине бит.

...Руслана балалар йортонда тәрбиәләнә. СССР тарҡалып, сәйәсәт тулыһынса үҙгәргәс, ул бер балалар йортонан икенсеһенә күсерелә. Өлкән ҡыҙҙарҙан туҡмалыу, уларҙың күлдәк-салбарҙарын йыуыу, аслы-туҡлы йәшәү - барыһын да кисерә ул. Йәберләүҙәргә түҙмәй, бер нисә мәртәбә балалар йортонан ҡасып та ҡарай. Әммә барыбер тотола һәм күрә алмаған мөхитенә кире ҡайтарыла. Туғыҙынсы класҡа еткәс иһә, ҡыҙыҡай балалар йортонда үҙен хужа итеп тота башлай. Хәҙер инде ул үҙе кескәйҙәрҙе йәберләй, туҡмай ала, ҡулға төшөргән аҡсаға әхирәттәре менән тәмәке тарта, һыра һемерә.

Һөнәрселек училищеһында уҡый башлағас, Руслана бөтөнләй бәйһеҙләнә. Үҙ аллы тормошҡа бөтөнләй әҙер булмаған ҡыҙ йыш ҡына дәрестәргә йоҡлап ҡала, тәрбиәселәрҙең һүҙен ҡолағына ла элмәй, булған аҡсаһын иҫерткес эсемлектәргә тотоноп бөтөрә.

Этә-төртә штукатур һөнәре алған ҡыҙ ата-әсәһенең тыуған яғына күсеп килә. Сыбыҡ осо туғандарына һыйынып ҡарай. Тик улар ялҡау, тәрбиәһеҙ ҡыҙҙы оҙаҡ тотмай, ҡыуып сығара. Көскә-көскә эшкә һәм ятаҡта урынлаша алған ҡыҙ өсөн "күңелле тормош" башлана. Шулай бер әхирәтенең тыуған көнөндә Владислав менән таныша. Ике мәртәбә төрмәлә ултырып сыҡҡан егет алама ғына бер өйҙә яңғыҙы йәшәй. Был кис уға эйәреп барған Руслана ятаҡҡа әйләнеп ҡайтмай. Тәүҙә үҙенең йортло булыуына ҡыуанған ҡыҙҙың бәхете оҙаҡҡа һуҙылмай. Бергәләшеп эсеүҙәр көн дә тиерлек туҡмалыу менән тамамлана.

Талау, урлашыу өсөн ике тапҡыр хөкөм ителеп, төрмәлә ултырып сыҡҡан Владислав артабан да шул уҡ шөғөлөн дауам итә. Аҙналар буйы юҡҡа сығып йөрөй ҙә, ҡайтып инеп, тағы Русланаға туҡмаҡ эләктерә. Йәш ирҙең енәйәт өҫтөндә тотолоуы ғына Руслананы ҡотҡарып ҡала. Владислав оҙайлы йылға хөкөм ителә. Ир төрмәгә ултырғас, Руслана үҙенең ауырлы булыуын белә.

Әсәй һөйөүен, наҙын татымаған-ғамы, әллә сабыйҙа үҙен эт типкеһендә йәшәткән иренең һыҙаттарын күргәнгәме, Руслана улын бөтөнләй яратмай. Хатта имеҙергә онотҡан саҡтары ла була. Уның ҡарауы, бала пособиеһының тиненә тиклем эсеп бөтөрә. Әсә кеше улы менән һөйләшмәгәс, уның теле үтә лә һуң асыла. Бала һаҡау, аурыу булып үҫә. Шул саҡта төрмәнән Владиславтың ниндәйҙер ауырыуҙан вафат булыуы тураһында хәбәр итәләр. Руслананың ҡыуанысының иге-сиге булмай. Күпмелер ваҡыт үткәс, ул тағы бер ир менән йәшәй башлай. Тик Руслана ауырға ҡалыу менән уныһы ла юҡҡа сыға. Эсеп-иҫереп йөрөп абортҡа барырға һуңлаған ҡатын тағы бер сабыйға ғүмер бирә. Был бәләкәсте лә әсәһенең ҡаты бәгерлелеге, мәрхәмәтһеҙлеге көтә.

Әҙәм балаһы барыһына ла күнә, өйрәнә, тигәндәре хаҡтыр, күрәһең. Шулай булмаһа, ошондай шарттарҙа ла бирешмәй үҫеп килеүсе балаларға ҡарап, ни әйтерһең? Кескәйҙәр бер-береһенә терәк булып, әсәһе туҡмағанда ҡосаҡлашып илап, бер һыныҡ икмәкте лә бүлешеп ашап, ҙурайып киләләр. Бәлки, был ғаилә тураһында бер кем дә белмәҫ тә ине. Сөнки Руслананың аралашҡан кешеләре эскеселәр, төрмәлә ултырып сыҡҡан шикле бәндәләр. Уларҙы балалар яҙмышы иң һуңғы сиктә генә борсоуы мөмкин. Руслананың үҙенән бәхетлерәк булған бар кешеләрҙе күрә алмауы уны хөкөм эскәмйәһенә ултырта. Бер көн шат тауышлы, сәскәләй кейенгән балалар янынан үтеп барғанда, уларҙың матур ҡиәфәтенә йәне көйә уның. Күп уйлап тормай, ошо йортҡа шартлатҡыс һалыныуы тураһында телефондан хәбәр итә. Әлбиттә, был хәбәр күп хәүефхәтәр тыуҙырһа ла, ялған шылтыратыусыны шунда уҡ билдәләйҙәр. Күрәһең, Руслананы һаҡлаған фәрештәләр уны әлегә ташламаған булғандыр, ошо саҡта амнистия тураһындағы актҡа ҡул ҡуйыла. Судта ҡатындың балаларына ҡарата мөғәмәләһе, уларҙы туҡмауы тураһында ғәйеп ташлана ташланыуға. Әммә Руслананың әсәлек хоҡуғынан мәхрүм ителмәүен күҙ уңында тотоп һәм амнистия уңайынан, уға ҡарата алып барылған енәйәт эштәре туҡтатыла.

"Һине мөғжизә генә ҡотҡарыуын аңлайһыңдыр? Артабан нимә эшләргә уйлайһың?" тигән һорауға, Руслана: "Тикшереү барышында мин бик күп уйландым. Бәлки, тәүге тапҡыр балаларым хаҡында уйлағанмындыр. Был донъяла тик улар ғына мине ярата бит. Ниндәй хәлдә булһам да, ҡосаҡларға маташалар, ә мин уларҙы этәреп ебәрә торғайным... Шуға күрә балаларым өсөн төҙәлергә тырышасаҡмын. Миңә аҡыл ултырһын өсөн Хоҙай Тәғәлә мине ошо кимәлгә алып килеп еткергәндер. Әлбиттә, хәҙерге балалар йортонда һәйбәт тиһәләр ҙә, улдарымдың мин тәрбиәләнгән мөхиткә эләгеүен теләмәйем. Сөнки минең юлдан яҙыуым шунан башланды",-тине...

..."Амнистияны ниңә сығаралар икән? Енәйәтселәр үҙҙәренең ҡылған яуыҙлыҡтары, ҡырын эштәре өсөн тулыһынса яуап бирергә тейеш бит", - тигәйне асыу менән бер ағай. Эйе, был бик сетерекле мәсьәлә. Шулай ҙа һәр әҙәм балаһының ҡылған эштәре өсөн яуап тотҡан кеүек, уның ғәфү ителергә, эшләгән хаталарын төҙәтергә, яңы тормош башларға хоҡуғы бар икәнлеген дә онотмайыҡ. Әлбиттә, һүҙ ҡанһыҙ вәхшиҙәр, маньяктар тураһында түгел. Алдынғы, үҫешкән тип һаналған йәмғиәттә тормош юлынан тайпылған кешеләрҙе упҡынға этәрергә түгел, ә уларға ярҙам ҡулы һуҙырға кәрәктер...

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

---

булғандыр, бер көн аҙна аҙағында кисләтеп кенә ауылға ҡайтырға сыҡтым. "Баймаҡ-Темәс" автобусынан беҙҙең яҡта йәшәүсе йор һүҙле, алсаҡ Миңлекамал инәй - Мәстүрә өләсәйемдең әхирәте - менән бергә төшөп ҡалдыҡ. Үҙемдең буп-буш ҡапсығымды яурыным аша элеп, инәйҙең ауыр ғына ҡапсығын тотоп алдым. Инәй менән ихласлап хәләхүәл, уның ейәне - минең синыфташым тураһында һорашып, яҙғы тайғаҡ юлда ҡабаланмай ғына ҡайтыу яғына ыңғайланыҡ. Туҡталыштан беҙҙең урамға тиклем арыу ғына ара. Һөйләшеп бара торғас, ҡылт итеп иҫкә төштө: туҡта, мин әйтәм, институтта үткән "Диалектология" фәненән белемемде тикшереп ҡарайым әле.

-Һеҙ ҡайһы яҡтыҡы ул, инәй? - тип туп-тура һорау бирҙем инәйгә.

-Улым, әллә һин мине танымай киләһеңме, мин бит Миңлекамал инәйең... - тип көлөп ебәрҙе инәй.

Уңайһыҙ хәлдән ҡотолоу өсөн юлдашыма башҡорт теленең Көнсығыш диалектының Ҡыҙыл һөйләшендә аңлашыусы беҙҙең яҡ кешеләренән айырмалы рәүештә, инәйҙең Көньяҡ диалекттың Эйек-Һаҡмар һөйләшендә һөйләшеүен, шунлыҡтан, уның беҙҙең ауылға килен булып ситтән төшөүе тураһында фаразымды һөйләп бирергә тура килде. Күңелсәк инәй:

- Һин мине ҡараңғыла танымағанһың икән тиһәм... - тип аҡланғандай итте лә, үҙенең ысынлап та Күгәрсен районы Мораҡ ауылында тыуып үҫеүе тураһында һөйләп бирҙе. Шулай итеп, бала саҡтан яҡшы таныш күрше инәй менән тағы берҙе таныштыҡ.

**Иҙел РӘХИМОВ.**

---

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Аралашыу һәләте

1980 йылда президент вазифаһына дәғүә иткәндә Рональд Рейган үҙенең һайлау алды кампанияһының төп идеяһын ябай һәм асыҡ итеп белдерә: "Эшмәкәрлегебеҙҙең үҙәге булып барыһына ла билдәле һәм ябай 5 һүҙ тороуы зарур. Бер ниндәй бөйөк иҡтисад теориялары кәрәкмәй. Сәйәси философия буйынса бер һүҙ булырға тейеш түгел. Бары тик 5 ҡыҫҡа ғына һүҙ: ғаилә, эш, күршеләр, азатлыҡ, тыныслыҡ". Рейган яҡшы етәксе була, сөнки ул киләсәкте алдан күргән, ҡарарҙарҙы еңел генә ҡабул иткән һәм үҙ вәкәләттәрен һөҙөмтәле башҡарыусы башҡаларға йөкмәткән. Әммә тап кеше менән үҙенсәлекле аралаша белеүе арҡаһында бөйөк лидер булып китә. Ул ил менән етәкселек иткәндә американдар уның кем икәнен, нимәгә таянғанын һәм нимә теләгәнен яҡшы белгән, шуға күрә бөтөн халыҡ уның менән иңгә-иң терәлеп бер сафҡа баҫҡан.

Әгәр киләсәктә ил башлығы булырға ниәтләмәһәгеҙ ҙә, аралаша белеү һәләтенә эйә булырға тейешһегеҙ. Никахтағы, эштәге, шәхси мөнәсәбәттәрҙәге уңышығыҙ быға ныҡ бәйләнгән. Нимә теләүегеҙҙе һәм ҡайһы йүнәлештә барыуығыҙҙы белмәһәгеҙ, кеше һеҙҙең арттан эйәрмәйәсәк.

**Дүрт төп принципты тотһағыҙ, һөҙөмтәле әңгәмәсе була алаһығыҙ.**

**Фекерегеҙҙе ябайлаштырығыҙ.** Аралашыу - һеҙ һөйләгән һүҙ генә түгел. Телмәр буйынса белгестәр нимә генә тимәһен, һөҙөмтәле аралашыу асҡысы булып ябайлыҡ тора. Кешеләргә ялтырауыҡлы һүҙҙәр һәм ҡатмарлы фразалар менән тәьҫир итеү хаҡында онотоғоҙ. Әгәр үҙегеҙҙе уратып алыусылар менән тығыҙ бәйләнеш булдырырға теләһәгеҙ, ябайлыҡҡа ынтылығыҙ. Наполеон Бонапарт секретарҙарына даими рәүештә: "Асыҡ булығыҙ, асыҡ булығыҙ, асыҡ булығыҙ", - тип ҡабатлар булған.

**Аныҡ кешене күрә белегеҙ.** Һөҙөмтәле аралашыусылар үҙ иғтибарын әңгәмәне артабан дауам итергә мөмкин булған кешеләрҙә туплаусан. Кешеләр менән аралашҡанда - айырым шәхестәр булһынмы ул йәки төркөмдәрме - үҙегеҙгә түбәндәге һорауҙарҙы бирегеҙ: аудитория кемдәрҙән тора, уларҙы ниндәй проблемалар борсой, ниндәй ихтыяж күтәрелергә тейеш һәм һеҙҙең ҡарамаҡта нисә минут ваҡыт бар? Әгәр яҡшы әңгәмәсе булырға теләһәгеҙ, мотлаҡ аудиторияға йүнәлеш алығыҙ.

**Халыҡҡа дөрөҫлөктө күрһәтегеҙ.** Һәр әңгәмә нигеҙендә ышаныс ята. Аудиторияның ышанысын яулауҙың ике ысулы бар. Беренсенән, һеҙ үҙегеҙ һөйләгән хәбәргә үҙегеҙ ышанырға тейеш. Ябай кеше лә хәбәренә ныҡлы ышанып ҡына түгел, ә ялҡынланып һөйләй ала. Фельдмаршал Фердинанд Фош үҙ заманында шулай тип белдергән: "Ерҙәге иң ҡеүәтле ҡорал - дөрләп янған кеше күңеле". Икенсенән, әйткән һүҙҙәрегеҙҙе тормошҡа ашырығыҙ. Ғәмәлгә ашҡан инаныуҙан да көслөрәк ышаныс тыуҙырған бер нәмә лә юҡ әле.

**Яуап алыуға өлгәшегеҙ.** Аралашыу барышында бер ваҡытта ла һуңғы маҡсат булып нимәлер эшләү тороуын онотмағыҙ. Әгәр тыңлаусыларға күп мәғлүмәт бирәһегеҙ икән, был әле һеҙ улар менән аралашаһығыҙ тигәнде аңлатмай. Кеше менән аралашҡан ваҡытта уларға нимәнелер тойоу, иҫләү, эшләү мөмкинлеге бирегеҙ. Ошо өс йүнәлештә даими уңыш ҡаҙана алһағыҙ, артығыҙҙан кешеләрҙе эйәртә алыу һәләтегеҙ яңы кимәлгә күтәреләсәк.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**



## 31 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Позднее раскаяние". Мелодраматический сериал (16+).
23.20 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Познер" (16+).
01.10, 03.05 "Королевство". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.15 "В наше время" (12+).
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Война 1812 года. Первая информационная" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Личное дело". Драматический сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Самара-2". Мелодраматический сериал (12+).
23.50 "Секретные материалы: ключи от долголетия". Док. фильм (12+).
00.45 "Девчата" (16+).
01.30 "Большая игра". Сериал.
02.50 "Закон и порядок-19". Сериал
03.45 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Азаматова Бибисара (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина". Әхмәт-Зәки Вәлиди
15.00 "Мөхәббәтле донъя". Фәдис Ғәниев, Лилиә Биктимерова (6+)
19.00 "Шиғриәт минуттары" (6+)
21.00 "Тағы ла һөйөү хаҡында". Әлфиә Юлсурина (12+)

### БСТ

**7.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Новости недели (на башк. яз.).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 Новости недели (16+).**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45, 05.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45, 05.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.40 "Көндәлек. Стерлибашевский район" (6+).**
**15.15 "Бауырһаҡ".**
**15.45 "Физ-ра".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**16.45 "КЛИО" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "Автограф" (6+).**
**18.45 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр" (на русск. яз.).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (6+).**
**23.00 "Шаяниум-2014" (6+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**03.30 М.Шаханов. "Тайна, унесенная Чингисханом". Спектакль (12+).**
**05.00 "Орнамент".**

## 1 АПРЕЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы". Ток-шоу (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Позднее раскаяние". Сериал (16+).
23.20 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "Косово. Как это было".
01.10, 03.05 "Восходящее солнце". Криминальная драма (16+).
03.00 Новости (12+).
03.40 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Личное дело". Сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Самара-2". Сериал (12+).
23.50 "Специальный корреспондент"
00.50 "Салам, учитель!"
02.00 "Честный детектив" (16+).
03.50 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Фирзинә Абдуллина (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Ҡыҙыҡ менән мәҙәк". Концерт (6+)
15.30 "Юмор" (6+)
16.00 "Күңелле йәшәйбеҙ" (6+)
16.30 "Кәтүк менән Бағанай" (6+)
16.45 Илсур Тайсин. Пародиялар (6+)
17.00 "Кәмит" (6+)
18.00 Хәлит һәм Айнур Фәтиховтар. Концерт (6+)
21.00 "Өс мөхәббәт тарихы". Театрлаштырылған тамаша (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Зеркальце".**
**11.00, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45, 05.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Хазина" (6+).**
**15.15 "Книга сказок".**
**15.45 "Борсаҡ".**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Дорога к храму".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 21.15, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "Үткән ғүмер. 1970-е годы" (6+).**
**18.45 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр" (на русск. яз.) (12+).**
**21.00 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Баик".**
**24.00 "Автограф" (6+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.30 С.Латыпов. "Оль-ля-ля". Спектакль (12+).**

## 2 АПРЕЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05, 04.25 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Позднее раскаяние". Сериал (16+).
23.20 "Политика" (18+).
00.20 Ночные новости.
00.30, 03.05 "Лицо со шрамом". Криминальная драма (16+).
03.00 Новости.
03.50 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Шифры нашего тела. Сердце"
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Личное дело". Сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Самара-2". Сериал (12+).
23.50 "Полярный приз". Док. фильм
01.45 "Адвокат". Детективный сериал.
03.10 "Закон и порядок-19". Сериал (16+).
04.00 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Ынйы Вәдүтова
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
15.00 Эльвира Сәйфуллина-Әсәҙуллинаның ижад кисәһе (6+)
20.00 "Көндәлек" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Әлфиә Әхмәтйәнова. Концерт (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15, 05.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45, 05.30 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45, 05.45 "Башҡорт йыры" представляет..."**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров".**
**15.45 "Семәр".**
**16.00 "Городок АЮЯ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Алтын тирмә".**
**18.45 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр" (на русск. яз.) (12+).**
**21.00 "ФК "Уфа": даешь премьер-лигу!"**
**22.00 "Историческая среда".**
**23.00 Диспут-клуб "Пятый угол" (16+).**
**23.45 "Жизнь замечательных людей" (6+).**
**01.00 "Единое время" (12+).**
**03.30 Ф.Буляков. "Заноза". Спектакль (12+).**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 3 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
12.55 "Дело ваше..." (16+).
13.35 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы" (16+).
16.10, 03.15 "В наше время" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Позднее раскаяние". Мелодраматический (16+).
23.20 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.10 "На ночь глядя" (16+).
01.05, 03.05 "Психоз". Триллер (18+).
03.00 Новости.
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ихлас".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Личное дело". Сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Самара-2". Сериал (12+).
23.50 "Территория страха". Док. фильм (12+).
00.45 "Одинокий ангел". Худ. фильм (12+).
02.50 "Адвокат". Детективный сериал.
04.20 "Комната смеха" (16+).

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Мөслим Әбсәләмов(6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Башҡортостандың ете мөғжизәһе". Дебет шәл (6+)
15.00 Ғәзим Ильясов. Концерт (6+)
21.00 "Кис ултырып". Юлиә Чигвинцова һәм Рафаэль Сәғитов (12+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 03.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Царь горы".**
**11.00, 18.00, 00.15, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 02.00 "Эзель". Сериал (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45, 05.30 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Поет Вильдан Яруллин" (12+).**
**14.45 "Автограф" (6+).**
**15.15 "Ғәләмәт донъя".**
**15.45 "Шәп арба".**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "ФК "Уфа": даешь премьер-лигу!"**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 21.15, 06.30 "Полезные новости"**
**18.15 "Сәләм+" (12+).**
**18.45 "Телецентр" (на башк. яз.).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр" (на русск. яз.).**
**21.00 "Лото 6 из 40 + Джокер". Прямой эфир.**
**22.00 "Аль-Фатиха".**
**23.00 "Имаш". Народный художник РТ Рашит Имашев (6+).**
**01.00 "Весенние мелодии".**
**03.30 Т.Минуллин. "Любовница". Спектакль (12+).**
**05.45 "Мелодии души" (12+).**

## 4 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
12.55 "Дело ваше..." (16+).
13.35 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Они и мы" (16+).
16.10 "В наше время" (12+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос. Дети". Музыкальный конкурс.
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.25 "Ночь в музее". Приключения (12+).
02.25 "Глаза змеи". Худ. фильм (16+).
04.20 "В наше время".
05.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.55 "Мусульмане".
09.10 "Ауаз".
10.05 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-ПФО".
17.30 "Личное дело". Сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).
23.25 "Живой звук". Муз. шоу.
01.20 "Детям до 16...".Мелодрама (16+)
03.10 "Адвокат". Сериал.

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05"Замандаштар". Роза Аккучукова
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
15.00 Зәки Вәлиди тураһында фильм (6+)
18.00 "Ҡош юлы". Мәғфирә Ғәлиева (6+)
21.00 "Тыуған ерем, Башҡортостан". Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Круизы в мир открытий" (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ғәләмәт донъя".**
**11.00, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Жизнь замечательных людей" (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости.**
**12.45, 01.45, 06.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Автограф" (6+).**
**15.15 "Зеркальце".**
**15.45 "Сулпылар".**
**16.00 "Байтус" (6+).**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**17.00 "История признания" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**18.45, 20.00 "Уфимскому "Времечко" - 10 лет".**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**21.00 "Попкорм" (16+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 Футбол. Первенство России среди команд ФНЛ.**
**01.00 "Дарман" (6+).**
**02.00 "Девушка с жемчужной сережкой". Худ. фильм (16+).**
**03.30 Н.Асанбай. "Райса + Файзи".**

## 5 АПРЕЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Бесценная любовь". Худ. фильм (16+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак".
10.55 "Жизнь как мираж" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Соседские войны" (12+).
14.10 "Спортлото-82". Комедия.
15.55 "Голос. Дети". Музыкальный конкурс.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию" (12+).
18.45 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Что? Где? Когда?"
00.10 "Сумерки. Сага. Рассвет: часть 1". Мистическая драма (12+).
02.10 "Трудности перевода". Мелодрама (16+).
04.00 "Приключения желтого пса". Худ. фильм.
05.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.50 "Двойной обгон". Худ. фильм.
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Вести. Дежурная часть".
11.55 "Честный детектив" (16+).
12.25 "Влюблен и безоружен". Худ. фильм (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным.
15.40 "Субботний вечер".
18.00 "Юрмала". Фестиваль юмористических программ (12+),
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Человеческий фактор". Мелодраматический сериал (12+).
00.35 "Александра" Мелодрама (12+).
02.45 "Горячая десятка".
04.00 "Ехали в трамвае Ильф и Петров". Худ. фильм.

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Нәжип Асанбаев
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Рампа". Хит-парад (6+)
18.00 "Ғәлиәбаныу". Спектакль (6+)
21.00 "Юлдаш йыры-2012".Концерт

### БСТ

**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.15 И.Юмагулов. "Волшебная мелодия". Спектакль (6+).**
**09.30 "Сәләм+" (12+).**
**09.45 "Көндәлек. Мечетлинский район" (6+).**
**10.15 "КЛИО" (6+).**
**11.00 "Здоровое решение" (12+).**
**11.30 "Аль-Фатиха".**
**12.00 "Следопыт" (6+).**
**12.45 "Үткән ғүмер. 1970-е годы" (6+).**
**13.15, 06.30 "Замандаштар" (6+).**
**13.45, 06.15 "Весело живем" (12+).**
**14.00 "Дарю песню".**
**16.00 "Одна, но пламенная страсть"**
**16.45 "Мархамат". Концерт.**
**18.15 "Году культуры посвящается… "Минуты поэзии" (6+).**
**19.00 "Башкорттар".**
**19.30 "Хазина".**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Еду я в деревню".**
**20.45 "Вопрос + Ответ = Портрет" (6+)**
**21.30 "Новости" (на русск.яз.).**
**22.00 "Етегән". Фильм о фильме.**
**22.30 "Етегән". Фильм (12+).**
**23.30 "Беҙ ҡабыҙған уттар һүнмәһен". Концерт памяти Гали Хамзина (6+).**
**01.30 "Реальная любовь". Худ. фильм (16+).**
**03.30 Н.Гаитбаев. "Любви все возрасты покорны". Спектакль (12+).**
**05.30 "Мелодии души" (12+).**

## 6 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Бесценная любовь". Сериал (16+).
08.10 "Армейский магазин" (16+).
08.45 "Смешарики". "ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дм.Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Обратная сторона полуночи". Худ. фильм (16+).
15.15 "Евгений Леонов. Страх одиночества" (12+).
16.10 "Полосатый рейс". Комедия.
17.50 "Вечерние новости" )с субтитрами).
18.00 "Точь-в-точь!" Шоу перевоплощений.
21.00 "Воскресное "Время".
22.00 "Сумерки. Сага. Рассвет: часть 2". Мистическая драма (12+).
24.00 "Телефонная будка". Криминальная драма (16+),
01.30 "Рамона и Бизус". Худ. фильм.
03.30 "В наше время" (12+).
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.40 "34-й скорый". Худ. фильм.
07.20 "Вся Россия". "Снегурочкино счастье".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
12.40, 14.30 "Печали-радости Надежды". Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
17.00 "Один в один". Пародийное шоу.
20.00 "Вести недели".
21.30 "Михаил Жванецкий. Юбилейный концерт" (12+).
23.30 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
01.20 "Отдамся в хорошие руки". Лирическая комедия (16+).
03.35 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05"Замандаштар". Нәжип Асанбаев (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Балҡыш". Нурия Ирсаева (6+)
15.00 Радик Хәкимйәнов һүҙҙәренә ижад ителгән йырҙар (6+)
16.00 "Йондоҙло сәғәт". Нәркәс Сиражетдинова (6+)
20.00 "Рампа". Хит-парад (6+)
21.00 "Һылыуҡай-2014" (12+)

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.30 "Йома".**
**09.00 "Еду я в деревню".**
**09.30 "Автограф" (6+).**
**10.00 "Бауырһаҡ".**
**10.15 "Городок АЮЯ".**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Шәп арба".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.15 "Семәр" (6+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели.**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башкорттар".**
**14.00 "Дарю песню".**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Замандаштар" (12+).**
**17.00 "Историческая среда".**
**17.30 "Местная история".**
**17.45 "История признания" (12+).**
**17.55 "Чемпионат России по волейболу среди мужских команд.**
**20.00 "Любимое дело" (12+).**
**20.30 "Время спорта" (16+).**
**21.00 "Лото 6 из 40 + Джокер".**
**21.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.00 "Баик".**
**23.00 "Вечер.com" (12+).**
**23.45 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00, 06.30 "Единое время" (16+).**
**02.15 "Жизнь замечательных людей" (16+).**
**03.15 О. Борисов, Я.Халецкий "Яблочная леди" (12+).**
**06.00 "Попкорм. Светская хроника" (16+).**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БИШБҮЛӘК РАЙОНЫ




**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

## 12-се һандағы кроссворд яуаптары

1. Йөрәк. 2. Көн. 3. Күпер. 4. Хәйер. 5. Күбәләк. 6. Һүрәт. 7. Сәләм. 8. Ғүмер. 9. Теләк. 10. Хәбәрсе. 11.Арыҫлан.12. Ҡәләм. 13. Тәҙрә. 14. Гөл. 15. Йәр. 16. Көрәш. 17. Өҫтәл. 18. Бысаҡ. 19. Ҡунаҡ. 20. Аслыҡ. 21. Буран. 22. Йыһан. 23. Мираҫ. 24. Һағыш. 25. Диуар. 26. Тамсы. 27. Балалар. 28. Әсә.

## *К О Т Л А Й Б Ы Ҙ !*



Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе ҡәҙерлебеҙ

**Айрат Ҡаһарман улы Юнысовты**

60 йәшлек күркәм юбилейы менән ҡайнар ҡотлайбыҙ. Хеҙмәт юлын кешеләрҙең һаулығын, ғүмерен һаҡлауға арнаған Айрат Ҡаһарман улы һәр кемгә ҡарата кеселекле, изгелекле булыуы менән абруй ҡаҙанған кеше. Һәр кем үҙ бәхетенә үҙе хужа, тиҙәр. Яҡыныбыҙ үҙ бәхетен үҙе тыуҙырып, ошо бәхеттән ғаиләһенә, туғандарына, дуҫтарына ла өлөш сығара белгән көслө рухлы, бал ҡортондай уңған, ярҙамсыл кеше. Барыбыҙҙы ла бәхетле, дәрт-дарманлы итеп йәшәткәнең, беҙҙең менән бергә булғаның өсөн оло рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ! Һинә ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, ғаилә бәхете, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙан ғына торған оҙон ғүмер, рух ныҡлығы, күңел тыныслығы теләйбеҙ.

*Атайыбыҙ, беҙҙең ҡәҙерлебеҙ,*
*Беҙ бәхетле ерҙә һин барға.*
*Фәрештәләр ҡунһын иңдәреңә,*
*Тыуған көнөң менән ҡотларға.*

*Йәшә әле бер ҙә биреשмәйсә,*
*Баш эймәйсә ҡырыҫ елдәргә,*
*Йәшә ерҙә яҙғы гөлдәр булып,*
*Терәк булып беҙҙең иңдәргә.*

**Ҡотлау менән - тормош иптәшең, балаларың һәм туғандарың исеменән - улың Наил.**

## *К О Т Л А Й Б Ы Ҙ !*

Март айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙ - **Бөрйән районы** Ҡотан ауылынан Рифҡәт Манапов, Нурания Манапова, **Туймазы ҡалаһынан** Айһылыу Ситдыҡова, Ильмира Илһамова, Зилә Ғәлиуллина, **Ғафури районы** Красноусол ҡасабаһынан Гөлсәсәк Кинйәбаева, **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан Гөлсирә Хәбибуллина, Зөһрә Кирәева, Рәсимә Сатлыҡова, Зөбәржәт Мырҙабаева, Ғәлимә Көҫәпҡолова, Талбазы ауылынан Фаиль Ғайсин, Гүзәл Әхмәрова, Төрөмбәт ауылынан Фәнил Иҫәнбаев, Яңы Итекәй ауылынан Зөлфир Ҡыҙрасов, Түбәнге Бәғәнәш ауылынан Рәфилә Сәйфуллина, Шишмә ауылынан Айһылыу Ғүмәрова, **Мәләүез районы** Смаҡ ауылынан Әлмирә Фәйзуллина, **Федоровка районы** Юрматы ауылынан Динә Нуриманова, **Өфө ҡалаһынан** Илдар Мәүлетбирҙин, Зөлфирә Шәрипова, Әхтәр Ғайсин, Фәриғә Ниғмәтова, Әлифә Насирова, Зилә Муллағолова, Резеда Гәрәева, **Өфө районы** Тәжрибә хужалығы ауылынан Гүзәл Зөбәйерова, **Бәләбәй районы** Приютово ауылынан Гөлфиә Ситдыҡова, **Благовещен районы** Түбәнге Иҙәк ауылынан Зинфира Шакирова, **Благовещен ҡалаһынан** Гүзәл Әүхәҙиева, **Учалы районы** Исламғол ауылынан Әдилә Ғәйетҡолова, **Стәрлетамаҡ районы** Төрөшлө ауылынан Зифа Низамова, Дергачевка ауылынан Зөлфиә Вәлитова, Наумовка ауылынан Зилә Салихова, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Зилә Смаҡова, **Әбйәлил районы** Рәхмәт ауылынан Идиә Ғәлимова, Байым ауылынан Фәтих Мөхәмәтдинов, **Йылайыр районы** Һабыр ауылынан Мәүлиҙә Таһирова, Миңзифа Тапаҡова, Зөһрә Батыршина, Кесе Юлдыбай ауылынан М. Дәүләтсурина, **Хәйбулла районы** Яңы Ергән ауылынан Шәрифйән Шәрипов, Аҡъяр ауылынан Тәнзилә Байрамғолова, **Баймаҡ районы** Октябрь ауылынан Гөлйөҙөм Яҙыҡбаева, **Дүртөйлө ҡалаһынан** Руфина Камалова, Тәнзилә Йыһаншина, Лидиә Ямалетдинова, **Дүртөйлө районы** Мәҫкәү ауылынан Рәфиҙә Ғималетдинова, **Яңауыл ҡалаһынан** Лена Ғабдуллина, Ирина Сафина, Гөлшат Хәтмуллина, **Яңауыл районы** Һандуғас ауылынан Рәзимә Мирхәмәтшина, Киҫәкҡайын ауылынан Гөлшат Вәлиева, **Благовар районы** Үрге Ҡарғалы ауылынан Гүзәл Үтәшева, **Ҡалтасы районы** Красный Холм ҡасабаһынан Флера Солтанова, **Миәкә районы** Ҡырғыҙ-Миәкә ауылынан Айгөл Йәнтүрина, **Бишбүләк районы** Йылбулаҡтамаҡ ауылынан Маһира Мөфтанова, Зөлфиҙә Муллағәлиева, **Балтас районы** Һәйтәк ауылынан Светлана Мөбәрәкова, Иҫке Балтас ауылынан Фәниә Харисова, **Шаран районы** Три ключа ауылынан Ольга Щеглова, Шаран ауылынан Гөлнара Ҡадирова, **Бүздәк районы** Иҫке Тауҙар ауылынан Зәйтүнә Ғатауллина, Көҙәй ауылынан Гөлдәр Федорова, Володарская ауылынан Бүләк Зарипова, Иҫке Боғаҙы ауылынан Лариса Баймөхәмәтова, Бүздәк ауылынан Зилә Мостафина, Әлфиә Ғәбдрәхимова, **Күгәрсен районы** Бикеш ауылынан Гөлгөнә Вәлиева һәм башҡаларҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ һәм ғүмерҙең оҙонон, сәләмәтлектең ныҡлыһын, тормоштоң йәмлеһен теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*ИҒЛАН*

Редакцияға **тәжрибәле бухгалтер** талап ителә. (347) **246-03-23, 253-25-44** телефондары буйынса мөрәжәғәт итергә.

✓ Өфөлә Вәкил Шөғәйепов ысулы менән ҡурай эшләү мәктәбен асыу өлгәрәп еткән мәсьәлә. Теләк булғанда, Мәҙәниәт министрлығы оҫтахана өсөн дә заман талабына яуап биргән бина таба алыр ине.



ФЕКЕР ҠОРО

# ШӘХЕСТӘРЕБЕҘГӘ...

## иғтибар етәме?

**2014 йылдың Мәҙәниәт йылы тип иғлан ителеүе барыбыҙҙы ла шатландырҙы. Республиканың Мәҙәниәт министрлығының иң һыҙғанып эшкә тотоноуы күңелгә йылы өҫтәй. Шулай ҙа был өлкәлә хәл ителеп бөтмәгән мәсьәләләр ҙә етерлек. Һүҙ халҡыбыҙҙың боронғо музыка ҡоралдарын тергеҙеүсе оҫта, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, 2013 йылда "Рәсәй рухы" исемле Рәсәй Хөкүмәте премияһы лауреаты Вәкил Шөғәйепов һәм уның мәҙәниәткә туранан-тура ҡағылған проблемалары тураһында бара.**

Вәкил Шөғәйеповтың үҙенең тырышлығы, ныҡышмалылығы менән өс боронғо башҡорт музыка ҡоралын - ҡурай, думбыра һәм ҡыл-ҡумыҙҙы тергеҙеүсе оҫта икәнен барыһы ла белә. Билдәле ҡурайсы, Башҡортостандың халыҡ артисы Юлай Ғәйнетдинов үҙенең "Ҡурай һәм ҡурайсылар" исемле китабында оҫта тураһында былай тип яҙа: "Вәкил Шөғәйеповтың асышы булмаһа, музыка уҡыу йорттарында бөгөнгө кимәлдә ҡурайға уҡытыу, профессиональ музыка ансамблдәре составында ҡурайҙа уйнап булмаҫ ине, композиторҙар Морат Әхмәтов, Айрат Ҡобағошов, Айһылыу Сәлмәнова, Анатолий Кубаев һ.б. ҡурай һәм симфоник оркестр, ҡурай һәм башҡа музыкаль ансамблдәр өсөн махсус әҫәрҙәр яҙмаҫ ине. Вәкил Шөғәйеповтың ҡурайҙары, думбыралары, ҡыл-ҡумыҙҙары булмаһа, Башҡортостан Республикаһының Халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестры булмаҫ ине".

Ҡурай эшләүҙең яңы ысулын табыу - республика өсөн ысынлап та ҙур ваҡиға булды. Зәһир Исмәғилевтың тәҡдиме буйынса Вәкил Шөғәйеповҡа Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре исеме бирелә. Башҡортостан Министрҙар Советының ул замандағы рәйесе З. Аҡназаров ҡарары менән уға оҫтахана өсөн ике бүлмә бүленә. Оҫта үҙе Республика ижад йортона эшкә алына, республика өсөн ҡурай әҙерләй башлай. Патент үҙендә генә булғанлыҡтан, байтаҡ йылдар ҡурайҙы ул бер үҙе генә эшләнә. Һуңғараҡ ҡурай эшләргә теләүселәр күбәйеп китте. Киң күңелле кеше булараҡ, Вәкилдең оҫтаханаһы ишегә һәр кемгә асыҡ булды, ҡурай эшләү серҙәрен һәр кем өйрәнә алды.

Минең Мәҙәниәт министрлығына тәҡдимдәрем бар ине. Өфөлә Вәкил Шөғәйепов ысулы менән ҡурай эшләү мәктәбен асыу өлгәрәп еткән мәсьәлә. Теләк булғанда, Мәҙәниәт министрлығы оҫтахана өсөн дә заман талабына яуап биргән бина таба алыр ине. Эш шунда: яңы ысул менән ҡурай эшләү серҙәре оҫтаның үҙенә генә билдәле. Ҡалған оҫталар Шөғәйеповты ҡабатлайҙар ғына бит. Яңы ысул менән ҡурай эшләү оҫталығы быуындан-быуынға күсергә тейеш түгелме ни?

Һуңғы 30 йыл эсендә В. Шөғәйепов музыка ҡоралдары эшләү, уларҙы көйләү буйынса ҙур тәжрибә тупланы. Авторҙың тупланған тәжрибәһенә таянып, уҡыу әсбабы сығарырға ниәте бар. Быға ла министрлыҡтың ярҙамы кәрәк.

**Былтыр Вәкил Шөғәйеповҡа Рәсәй Хөкүмәте ҡарары менән "Дух России" исемле дәүләт премияһы бирелеүе уның оло абруйға лайыҡлы икәнен күрһәтеп тора. Шуға ла мәҙәниәтебеҙҙең үҫешенә тос өлөш индереүсе Шөғәйепов кеүек арҙаҡлы шәхестәребеҙгә Мәҙәниәт йылында булһа ла иғтибар һәм ихтирам күрһәтәйек әле.**

**Марат ХАФИЗОВ.**

АТЫҢ КЕМ?

# ҠЫҘҘАР ИСЕМЕ...

## сәскәләй нәзәкәтле булһын

**"Һәр кешенең исеме хужаһын ғүмер буйына юлдаш булып оҙата килә, шуның өсөн дә исем һайлауға етди ҡарарға кәрәк", ти минең әсәйем. "Алтын ерҙә ятмаҫ, яҡшы исем илдә серемәҫ", ти бит халыҡ мәҡәле лә.**

Апайыма һәм миңә исем ҡушҡанда ғаиләлә һәм туғандар араһында арыу ғына бәхәс ҡупҡан. Миңә исем һайлағанда, мәсәлән, туғандарым Айгөл, Алина, Илгизә тигән исемдәрҙе ҡушырға кәңәш иткән. Әммә әсәйем, ҡыҙ баланың исеме сәскә кеүек матур булырға тейеш, тип, миңә Һиныйгөл исемен һайлаған. Мулла Һиныйбикә тип аҙан ҡысҡырған.

Апайымдың исеме - Таңсулпан. Ул - таң йондоҙо, Сулпан тигәнде аңлата. Ҡайҙа ғына барһаҡ та, апайыма ла, миңә лә "Исемең матур, кемдәр ҡушҡан?" тип өндәшәләр. Быны ишетеүе бик шатлыҡлы.

Исемде һатып алып булмай. Исем-атың ғүмер буйына һинең зауҡың булып, йәнәшәңдә килә. Малайҙарға - батырҙарса яңғыраған, булат ҡылыстай сыңраған, ә ҡыҙҙарға сәскәләр кеүек нәзәкәтле, йондоҙҙарҙай серле башҡорт исемдәре ҡушырға саҡырам.

**Һиныйгөл ИШБУЛАТОВА,**
**Ҡ. Дәүләткилдеев исемендәге Республика һынлы-сәнғәт гимназияһы уҡыусыһы.**

ХОККЕЙ

# ЕҢЕҮ БЕҘҘЕКЕ БУЛАСАҠ!

**КХЛ-дың иң көслө командаларының береһе "Салауат Юлаев" плей-оффҡа беренсе тапҡыр сыҡҡан "Барыс" менән көсөргәнешле уйын серияһын дауам итә. Был ике команданың алыштары үҙ көйәрмәндәрен генә түгел, ә барлыҡ хоккей яратыусыларҙы ла иғтибар үҙендә.**

Астанала уҙған уйындарҙан һуң командалар йәнә Өфөлә осрашты. "Өфө-Арена"лағы ике осрашыу ҙа юлаевсыларҙың көйәрмәндәре өсөн шатлыҡлы булды. Владимир Юрзинов хоккейсылары оҫта уйын, еңеүгә ҙур ынтылыш күрһәтеп, бар оҫталыҡтарын һалып, серияларғы иҫәпте үҙ файҙаларына 3:2 итеүгә өлгәште. Юлаевсыларҙы "Барыс"тарҙың тупаҫ һәм көс ҡулланып уйнауы ла сафтан сығара алманы. Шулай ҙа ҡунаҡтарҙың был алымдары эҙһеҙ үтмәне: юлаевсыларҙың көслө уйынсыларының береһе Егор Дубровский йәрәхәтләнде.

Өсөнсө матчта юлаевсыларҙан еңелгәндән һуң, "Барыс"тарҙың баш тренеры үҙ командаһын ҡаты тәнҡитләне. "Бөгөн боҙҙа плей-оффта уйнарлыҡ тик бер генә команда булды. Ул - "Салауат Юлаев". Ә беҙ плей-офф кимәлендәге уйын күрһәтә алманыҡ", - тине ул.

Дүртенсе матчта ла юлаевсылар көслөрәк булып сыҡты. Овертаймға ҡуҫҡан уйында нөктәне Кирилл Кольцов ҡуйҙы. Юлаевсыларҙың күпселектә ҡалыуынан файҙаланып, ул ҡунаҡтар ҡапҡаһына гол индерҙе. Уйын Астанаға күсте.

5-се матчта "Барыс"тарҙың еңеүгә ынтылышы көслөрәк булып сыҡты. Улар ҡунаҡтар ҡапҡаһына 2 мәрәй индерһә, юлаевсылар тик бер шайба менән генә яуап ҡайтара алды. Шулай итеп, ярымфиналда Магнитогорскиҙың "Металлург"ына ҡаршы кем сығасаҡ икәнлеген асыҡлау өсөн командалар йәнә Өфөлә осраша.

**Наҙгөл САФУИЛЛИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КҮҘ - ДАРЪЯ,

## күңел - мәрйә

Ир-азамат билгеһе - тышта мырҙа, өйҙә - ҡол.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Нимәгәлер өйрәтеүсе белгестәр ябай ғына бер нәмәне алып, уны шул тиклем ҡатмарлаштыра. Ә аралашыу буйынса белгестәр ниндәйҙер ҡатмарлы нәмәне алып, уны ябайлаштыра.

**(Джон Максвелл).**

Мөхәббәт - ул барыһынан элек үҙеңде ҡорбан итеү.

**(Жан Ануй).**

Кешеләрҙең төрлө иҫәп-хисапҡа, үсләшеүҙәргә ҡоролған уйҙары емешһеҙ, әлбиттә.

**(Вольтер).**

Тыныс тормош теләгән кешенең туҡынланыуҙары башҡаларға ҡарағанда күберәк була.

**(Бион Борисфенит).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер шәкерт үҙенең остазына былай тип өндәшкән: "Мин Хоҙай хеҙмәтсеһе өсөн ун ҡағиҙә барлығы тураһында ишеттем. Улар тураһында мин бер ни ҙә белмәйем. Ниндәй ҡағиҙә улар? Ул ҡағиҙәләргә мине лә өйрәтә алмаҫһыңмы?"**

**- Әлбиттә, мин ул ҡағиҙәләр тураһында беләм. Әммә уларға мин һине өйрәтә алмайым. Ләкин был ҡағиҙәләргә өйрәнеү өсөн кемгә мөрәжәғәт итергә икәнен әйтә алам. Тәүге өс ҡағиҙәне һин теләһә ниндәй баланан, ә ҡалған етеүһен... уғрыларҙан өйрәнә алаһың.**

**- Балаларҙан өйрәнә торған ниндәй ҡағиҙәләр улар? - тип аптырап һораған шәкерт.**

**- Тыңла һәм хәтереңдә ҡалдыр, - тигән остаз. - Бала кешенән һин өс нәмәгә өйрәнә алаһың: беренсеһе - шатланырға; икенсеһе - эшһеҙ ултырып, бер минутыңды ла әрәм итмәҫкә; өсөнсөһө - үҙеңә кәрәкте ныҡышмалы талап итергә.**

**- Аңланым, остазым, - тигән шәкерт. - Ә быға уғрылар миңә ниндәй һабаҡ бирә ала һуң?**

**- Беренсенән, эштәреңде ҡысҡырмай, фашламай ғына эшләргә. Икенсенән, эшеңде тамамламаған булһаң, уны яңынан ҡайтып эшләп, тамамлап ҡуйырға. Өсөнсөнән, һөнәрең буйынса бар иптәштәреңде хөрмәт итергә һәм яратырға. Дүртенсенән, алдыңа ҡуйған маҡсатың өсөн үҙеңде ҡорбан итергә әҙер булырға. Бишенсенән, әгәр ҙә һин нимәгәлер эйә булырға теләһәң, ул юҡ ҡына бер тәтәй булғанда ла, уны үҙеңдә булған бар байлыҡҡа алыштырырға әҙер булырға. Алтынсынан, бер ниндәй ҡаршылыҡтар алдында ҡаушап ҡалмаҫҡа. Етенсенән, үҙеңдең бурысыңа тоғро ҡалырға. Ошо ҡағиҙәләргә өйрәнгәндән һуң ғына һин Хоҙай хеҙмәтсеһенә тиң булған сифаттарға өлгәшерһең...**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт: Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Азамат ӘБҮТАЛИПОВ, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 28 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тираж - 5153
Заказ 984